✓ ***Хөрмәтле уҡыусыбыҙ, 2009 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзиткә яҙылыу тамамланып килә, тип хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ. 50665 индексла "Киске Өфө" гәзитенә 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына (льготалыһына) 282 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Артабан да бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер төйнәйек.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

13-19 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ)

2009 ЙЫЛ

№24 (338)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәмғиәтте туплаусы ла...**

сәләмәт мөхит өсөн көрәшсе лә ул журналист



2

**Милләтем, йөрәгенде ас,**

бына мин килдем...



8-9

**Һабантуйҙың баһаһын...**

халыҡ йолалары күтәрә



10

**Батыр икәнһең, көрәш, әйҙә -**

ысын ир-егеттәр спортта ла һынала



11

**ТВ программа**

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Толерантлыҡ бер яҡлы ғына була аламы? Йәки кемгәләр түҙеп ҡараған кеше үҙенә ҡарата ла шундай уҡ ҡараш тоймаһа, уларҙың мөнәсәбәте толерантлы тип аталырға хаҡлымы?

*Хәлил БАРЛЫБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры:*

-Беҙ кешеләр, милләттәр, дәүләттәр араһындағы мөнәсәбәттә һәр саҡ ике яҡты ғына күреп өйрәнгәнбеҙ. Кешеләр, милләттәр, дәүләттәр бер-береһенә йә дуҫ, йә дошман, йә яҡшы ҡараштa, йә насар ҡараштa. Донъяла йә изгелек, йә яуызлыҡ, йә тыныслыҡ, йә һуғыш ҡына бар. Лев Толстой яуызлыҡҡа ҡаршы бармау идеяһын алға һөргән, әммә Рәсәй был юлды һайламаны. Махатма Ганди иһә икенсерәк юл һайлап: "Инглиздарҙың тауарын һатып алмаҫҡа, тик һиндтарҙыҡын ғына алырға", - тигән лозунг ташланы һәм бының менән һиндтар үҙ маҡсатына иреште лә. "Беҙ толерантлы милләт", тип, ереңә, милли тормошоңа баҫып инеүселәргә сыҙап ҡарауҙы толерантлыҡ тип атап булмай. Шул уҡ ваҡытта тупаҫ көс менән булмышыңа баҫып инеүселәргә ҡаршы тороу ҙа яҡшыға алып килмәй. Был йәһәттән беҙ тарихи һабаҡ алған халыҡ. Әлеге ваҡытта философтар "Рәсәйгә һулар һауалай тринитаризм кәрәк" тигән лозунг ташланы. Тринитаризм - яуызлыҡ менән изгелектең урталығын эҙләү, йәғни әүҙем толерантлыҡ күренеше. Дошманын еңгән еңеүсе түгел хәҙерге заманда, дошманының үҙенә ҡарата ҡарашын һәм аңын үҙгәртә алыусы еңеүсе.

*Рауил ИҘРИСОВ, уҡытыусы:*

-Фәлсәфәүи күҙлектән ҡарағанда, йәшәйештә бер нәмә лә бер яҡлы ғына була алмай. Ғөмүмән, һәр бер хәрәкәткә, хәлгә, күренешкә, ваҡиғаға йә иһә шәхескә төрлөсә ҡарап, хатта ҡапма-ҡаршы баһалар бирергә була. Бында ниҙендер тышҡы йә ваҡытлы сифаттарынан уның даими эске хәл-торошон, йәғни асылын айыра белеү кәрәк. Толерантлыҡ менән дә шулай. Бына ике малай низағлашып, сәкәләшеп китте, ти. Ситтән ҡарап торһаң, ошо мәлдә уларҙан да дошманыраҡ, уҫалыраҡ малайҙар юҡтыр, тип уйларға була. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, ошо ике малай көлөшә-көлөшә бергә уйнап йөрөмәһенме! Халыҡтар менән дә шулай булыуы мөмкин. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙҙең ил кешеләре өсөн немецтарҙан да яуызыраҡ башҡа халыҡ булмағандыр. Ошо стереотип ололарҙан йәш быуындарға күсә килеп, оҙаҡ йылдар буйы халыҡ хәтеренән сыҡманы. Шулай булғас, һәр ваҡытта һәм һәр кемгә лә толерантлы булып булмай. Мәҫәлән, халҡымды мыҫҡыллап, түбәнһетергә маташҡан әҙәмдәргә лә мин түҙеп ҡарап торорға тейешме ни?

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

АФАРИН!

# РУХ КӨСӘП...

## Баймаҡ районында Милли матбуғат аҙналығы "Корама байрамы" менән йәнәш үтте



**Туған телдәге баҫмаларға яҙылыу йәһәтенән Баймаҡ районы халҡының әүҙемлеге, тоғролоғо беҙгә яҡшы билдәле, шул уҡ мәлдә талапсан уҡыусы тигән даны ла бар уларҙың. Шуға ла был район халҡының республикабыҙҙа ай башында иғлан ителгән Милли матбуғат аҙналығына ҡушылмай ҡалыуын күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел ине. Шулай итеп, башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙың баш мөхәррирҙәре һәм хәбәрселәре, район китапханалары янында эшләп килгән "Атайсал" һәм "Ағинәйҙәр" клубтары ағзалары, китапханасылар һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығындағы йыйын "Корамаларҙа - күңел йылыһы" бәйгеһенең финалы менән бергә үтте.**

(Дауамы 5-се биттә).

*✓ Журналист был осраҡта кем булырға тейеш: ябай күҙәтеүсеме, әллә көрәшсеме? Әлбиттә, көрәшсе! Яҡшыны - яҡшы, яманды яман тип, хәҡиҡәттең күҙенә ҡарап атаусы булырға тейеш. Кешелектең рухи сәләмәтлеге өсөн дә яуаплы.*



ҮҘЕБЕҘ ТУРАҺЫНДА

# ЙӘМҒИӘТТЕ ТУПЛАУСЫ ЛА...

## сәләмәт мөхит өсөн көрәшсе лә ул журналист

**Йәмғиәтебеҙ тормошонда матбуғат сараларының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Йәмғиәтте туплаусы көс, тип атамағандар бит уны юҡҡа ғына. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ана шул йәмғиәттең хәүефһеҙлеге, уның халҡының рухи торошо һәм сәләмәтлеге, өмөтлө киләсәге өсөн көрәшсе лә булырға тейеш бит ул бөгөнгө матбуғат. Ошо йәһәттән йәмәғәтселек фекерен туплау ниәтенән бер нисә кешегә: "Журналисты хәҡиҡәт өсөн көрәшсе итеп ҡабул итәһегеҙме?" - тигән һорау бирҙек.**




**Тәфтизан УШАНОВ, ветеран-журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:**

- Ҡырҡ ете йыл журналист булып эшләү осоромда гәзит һүҙенең ниндәй көскә эйә булыуына тамам инанғанмын. Совет заманында был мәсьәлә бигерәк көнүҙәк булды. Ваҡытлы матбуғатта баҫылған һәр материал тип әйтерлек тейешле органдар тарафынан тикшерелеп, аныҡ саралар күрелә торғайны. Ә журналистарға талап икеләтә ҡаты булды: яҙған мәҡәләң фәҡәт дөрөҫлөктө сағылдырырға тейеш. Бигерәк тә тәнҡит мәҡәләләрендәге һәр мәғлүмәт тикшерелә, дөрөҫ сығанаҡтарға нигеҙләнеп яҙыла ине.

Һуңғы тиҫтә йыл эсендә илебеҙҙә бихисап яңы гәзит-журналдар баҫылып сыға башланы. Улар араһында совет осоронан килгән абруйлы, үҙ уҡыусылары булған һәм улар ышанысына тап төшөрмәгән баҫмалар менән йәнәш, тел байлығын да, әҙәпте лә һанға һуҡмаусы "бульвар" гәзиттәренең күбәйеүе күңелде ҡыра.

Беҙҙең Башҡортостан райондарында күпселек уҡыусылар өйрәнелгән "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәрен алдыра. Һуңғы йылдарҙа рухи донъябыҙҙы байытып, балҡытып ебәргән яңы баҫма - "Киске Өфө" гәзите күпләп тарала башланы. "Киске Өфө"нө беҙҙә халыҡ ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡый, һәр һанын көтөп алабыҙ, сөнки уның һәр материалы көнүҙәк темаға ҡағылышлы булыуы менән отошло. Ул ысын мәғәнәһендә рухиәтебеҙ һаҡсыһы, мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ ҡотон һаҡлаусы. Ә тормош хәҡиҡәте -ул бына ошо рухи хазиналарҙы һаҡлау, байытыу һәм үҫтереү. Бөгөнгө көндә ошо үҙе хәҡиҡәт өсөн көрәшеү түгелме ни? Ваҡытлы матбуғат фәҡәт тормош хәҡиҡәтен сағылдырғанда һәм уның өсөн көрәшкәндә генә уҡыусыһы абруйын яулай ала. Шуны иҫтә тотһаҡ ине.

**Ризван ХАЖИЕВ, журналист, яҙыусы:**

- Ваҡытлы матбуғат менән партия етәкселек иткән йылдарҙа беҙгә йыш ҡына "дүртенсе власть" тип мөрәжәғәт итә торғайнылар. Сөнки закондар сығарыу, башҡарыу һәм хоҡуҡ һаҡлау властарынан ҡала, матбуғаттың көсө һәм ҡеүәте - йәмәғәт фекерен туплаусы трибун булып сығыш яһауында, халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәт итеүендә, уға таяныуында, тип иҫәпләй инек беҙ. Был хәл үҙе үк матбуғаттың тормошобоҙҙағы теге йәки был ваҡиғаға баһа биргәндә, бөтәһенән элек, халыҡ фекеренән сығып эш итә, кәңәшләшә лә, кәрәк саҡта, ҡаты талап та ҡуя белеүендә асыҡ күренә. Шуға ла ул ваҡыты менән КПСС яғынан да таяу һәм яҡлау тапты, "кеҫә матбуғатына" әйләнеп барманы. Быны мин утыҙ йылдан ашыу матбуғатта тупланған эш тәжрибәмдән сығып әйтәм. Бөгөн иһә бөтөнләй икенсе күренеш. Кем күберәк түләй- журналист та шуныҡы, кем ҡурсалай, финанслай - матбуғат та уны яҡлап сығыш яһай, уның "ҡурайына" бейей. Шуға ла бөгөн ҡайһы ғына гәзитте алма, унда маҡтау, шапырыныу, ҡабыҡ һуғып, сәүкә осороу ғәләмәте ярылып ята.

Үҙенең һаулығын, ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, халыҡҡа тиҙ һәм дөрөҫ хәбәр биреү өсөн журналистар үткән быуаттың 90-сы йылдарында байтаҡ эш башҡарҙы. Ләкин һөнәри бурыстарын үтәгәндә улар йыш ҡына бөйөк кәртәләр, үтә алмаҫлыҡ ҡаршылыҡтар менән дә йыш осрашты. 1988-1996 йылдарҙа БР Журналистар Союзы рәйесе, 1990-95 йылдарҙа БР халыҡ депутаты вазифаларын башҡарған кеше булараҡ, яҡшы беләм: бындай күренештәр бөгөн дә дауам итә. Беҙҙе кем яҡларға тейеш: судмы, прокуратурамы, милициямы, хөкүмәтме, Президентмы, әллә бөтәһе лә бергәме, тигән һорау асыҡ килеш ҡала килә. Был турала күп һөйләп, байтаҡ яҙһаҡ та, файҙаһы аҙ. Хатта беҙ, журналистар, бер-беребеҙҙе лә яҡларға, һаҡларға тартынабыҙ, кемдәндер шөрләйбеҙ, ҡурҡабыҙ. Журналистарҙы хоҡуҡи, социаль, профессиональ яҡлау системаһы булырға тейештер бит? Дөрөҫ, 90-сы йылдар урталарында "Башҡортостан Республикаһы журналистарын дәүләт яҡлауы тураһында" Закон проекты ла әҙерләнә башлағайны, ләкин Юғары Совет Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға әйләнгәс, ул проект төшөп ҡалды. Тимәк, бөгөнгө депутаттарға ниндәйҙер журналистарҙы яҡлау кәрәкмәй, уларҙың былай ҙа эштәре тығыҙ бит.

**Флүзә ИШБИРҘИНА, уҡытыусы, хеҙмәт ветераны:**

- Эйе, журналистика өлкәһен "дүртенсе власть" тип йөрөткән замандар булды, ләкин ул бит сараһыҙҙың көнөнән тигәндәй, тейешле органдарҙың һәр береһе үҙ бурысын еренә еткереп башҡармауы йәки етешһеҙлектәргә, һәр төрлө мутлыҡтарға "күҙ йомоп" ҡарауы арҡаһында килеп сыҡҡан атама ине, минеңсә. Бәлки, яңылышамдыр, ләкин әлеге "торғонлоҡ" йылдарында етешһеҙлектәрҙе күрһә - журналистар күрҙе, тәнҡитләһә - улар тәнҡитләне, ләкин тап ана шуның өсөн күбеһе үҙҙәре лә етерлек түпәләнде, хатта юҡ ителде.

Заманалар ниндәйгә генә төрләнмәһен, журналист хәҡиҡәт өсөн көрәшсе булып ҡалырға тейеш, тип уйлайым мин. Дөрөҫ, инде онотолоп бөтһә лә, С. Доронин һымаҡ журналистарҙың абруйына тап төшөргән, аҡсаға һатылған "кеҫә" журналистары ла күп булды заманында, ләкин ундайҙар менән бер ҡатарҙан дөрөҫлөктөң күҙенә ҡарауҙан ҡурҡмаған Листьев, Киселев, Политковская кеүектәр ҙә аҙ булманы.

Аҡ менән ҡараның яғалашыуы, яҡшы менән ямандың көрәше бер ҡасан да тынып торғаны юҡ әле. Бәлки, ул көрәш йөҙөн, эш итеү сараларын бер аҙ үҙгәртеүе ихтимал, ләкин асылы шул уҡ: хәҡиҡәт һәм уға яла яғыу. Бөгөн журналист, һис ҡасан да булмағанса, гәзит-журнал биттәрен генә түгел, телевидение, интернет кеүек мәғлүмәттең электрон сараларын да сырмап алған ҙур яу яланында тора. Дәһшәтле мәғлүмәт һуғышы бара. Теге йәки был шәхесте, уның арҡылы ошо шәхесте бөйөк иткән халыҡты һәм хатта тотош милләтте юҡҡа сығарыу, уның йөҙөн ҡараға буяу өсөн теләһә ниндәй бысраҡ яла һәм сараларҙан да тартынмай дошман. Һәм журналист был осраҡта кем булырға тейеш: ябай күҙәтеүсеме, әллә көрәшсеме? Әлбиттә, көрәшсе! Яҡшыны - яҡшы, яманды яман тип, хәҡиҡәттең күҙенә ҡарап атаусы булырға тейеш. Бынан тыш, кешелектең рухи сәләмәтлеге өсөн дә яуаплы матбуғат хеҙмәткәрҙәре. Күрәһегеҙ бит көн дә: телевидениены нимәгә әйләндерҙеләр... Әхләҡһыҙлыҡ, көс ҡулланыу, секс күрһәтәләр. Ниндәй генә тапшырыу йә фильм ҡарама - бөтәһендә лә араҡы эсеү, тәмәке борҡотоу пропагандалана. Ситләтеп, әлбиттә: кино бит, йәнәһе. Ә ул үҫмер һәм балалар күңелен сәп итә, улар, тормош ана шулай булырға тейеш икән, тип уйлай башлай.

Бына ошондай рухһыҙлыҡ, мәҙәни ярлылыҡ һәм сикләнгәнлек, сәйәси күрәғаралыҡ күренештәренә ҡаршы нисек көрәшмәҫкә тейеш һуң эсендә йәне булған кеше һәм бигерәк тә журналист тигән юғары исем йөрөтөүсе кеше? Был, ахыр сиктә, уның һөнәре генә түгел, ә кешелек, граждանлыҡ бурысы ла тип иҫәпләйем мин.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика милли-мәҙәни йәмәғәт ойошмалары етәкселәренә һәм әүҙемселәренә Почет грамоталары һәм Рәхмәт хаттары тапшырылды. Сарала БР Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты. Бөгөн республикала 60-тан ашыу милли-мәҙәни үҙәк ойошторолған. 14 ауылда милли-мәҙәни үҙәк эшләй.

✓БР Хөкүмәте йортонда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Үҫеш программаһының Рәсәйҙәге вәкиллеге араһында тотороҡло иҡтисади һәм социаль үҫешкә йүнәлтелгән проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документҡа БМО-ның РФ-дағы даими координаторы, БМО Үҫеш программаһының Рәсәйҙәге даими вәкиле Фроде Мауринг әфәнде һәм Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡул ҡуйҙы.

✓РФ хөкүмәте йәш ғалимдарға гранттар түләү тураһында ҡарар әҙерләне. 35 йәшкә тиклемге фән кандидаттарына - 600 мең, 40 йәшкә тиклемге фән докторҙарына - миллион һум грант ҡаралған. Гранттар түләү өсөн быйылғы бюджетҡа һалынған дөйөм саралар күләме 900 миллион һум тәшкил итә.

✓Конгресс-холда Башҡортостанда кеше потенциалын үҫтереү тураһындағы докладтың исем туйы булды. Был китап БР Фәндәр академияһының социаль һәм сәйәси тикшеренеүҙәр институты һәм республиканың ғилми үҙәктәре хеҙмәткәрҙәре көсө менән әҙерләнгән. Был доклад БМО-ны үҫтереү программаһы инициативаһы буйынса йыл һайын баҫыла. Ул Ер шарында кеше үҫешенең төп йүнәлештәрен билдәләүгә арналған.

✓Новгород ҡалаһында Волга буйы федераль округында йәшәүсе күп балалы ғаиләләрҙе "Ата-әсәлек даны" ордены менән бүләкләү тантанаһы булып үтте. Был бүләккә Учалы районынан ун бала тәрбиәләүсе Зилә һәм Раил Лутовтар лайыҡ булды. Был ғаилә быға тиклем Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡулынан "Әсәлек даны" миҙалы, шулай уҡ "Газель" микроавтобусы асҡысын да алған булған.

*✓ Дүрт йөҙ илле ике йыл элек ата-бабаларыбыҙ "урыҫ халҡы менән бергә булырға кәрәк" тип бер әйткән икән, дүрт быуат ярым ваҡыт эсендә шул һүҙҙәргә башҡорттоң бер генә быуыны ла хыянат иткәне булманы.*

АҘНА ШАҢДАУЫ

# "ДӘҮЛӘТ ДУМАҺЫНА ҠАРАУЫ ЛА ОЯТ. ПИАНИНОЛА УЙНАЙҘАРМЫ НИ?"

## Мортаза Рәхимовтың тәнҡите кемгә оҡшамай?

**Һүҙ күтәрмәгән кешеләр була. Ауыҙ асып булмай үҙҙәренә. Үпкәләп баралар. Һәр бер һүҙҙә ғәйеп күрәләр. Үсегәләр. Тумһаялар. Ҡаштарын емерәләр. Йоҙроҡтарын төйәләр. Аяҡ тибәләр. Ҡысҡырына башлайҙар. Әйтелгән һүҙҙе иғтибар менән тыңларға, баһаларға, уйланырға, фәһем алырға ине. Юҡ шул. Тыңлар өсөн ҡолаҡ, уйланыр өсөн баш, фәһем алыр өсөн теләк кәрәк. Күрәһең, ҡайһы берәүҙәрҙең ҡолағы ғына бар, ә баштары шул ҡолаҡтарын йөрөтөр өсөн генә тәғәйенләнгән. Аҡылдары хаҡында инде һүҙ ҙә алып барырлыҡ түгел. Хәйер, быныһы баш һүҙ урынына ғына булды.**

Үткән аҙнала "Московский комсомолец" гәзитендә һәм унын рәсми сайтында "Башҡортостан Республикаһы диссиденты" тигән мәҡәлә донъя күрҙе. Журналист Михаил Ростовский Президент Мортаза Рәхимов менән ойоштороған интервью ул. Туранан-тура һорауҙар. Асыҡтан-асыҡ яуаптар. Президентҡа ҡарата әйтелгән һүҙ генә аңлашылманы. Советтар Союзы ваҡытында "диссидент" тип Совет власына, Коммунистар партияһы эшмәкәрлегенә ҡаршы сығыусыларҙы атай торғайнылар. Тимәк, Ростовский фекеренсә, Мортаза Рәхимовты власҡа ҡаршы сыҡҡан тип баһаларға кәрәкме? Яңы Рәсәйҙә ун туғыҙ йыл элек демократия иғлан ителеп, ил Конституцияһында кеше һәм граждан хоҡуҡтары, һүҙ, демонстрациялар һәм митингылар һ.б. азатлыҡтары хаҡында асыҡтан-асыҡ яҙылған икән, кемделер "диссидент" тип атарға мөмкинме һуң? Был-бер.

Икенсенән, Мортаза Рәхимовтың был интервьюһы ни эшләп бер нисә тиҫтә баҫма (шул иҫәптән, Интернет-сайттары) хәбәрселәрен, журналистарҙы, сәйәси күҙәтеүселәрҙе һәм ҡайһы бер урта ҡул сәйәсмәндәрҙе унын айырым тезистарын үҙҙәренсә бороп "анализ"ларға, республикабыҙ башлығына, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, бигүк яғымлы булмаған әйтемдәр һәм һүҙҙәр менән ябырылырға мәжбүр итте һуң? Әйҙәгеҙ, ошоға бәйле мәсьәләнең төрлө яҡтарын асыҡлап үтәйек, булмаһа.

Тәүгеһе - федераль киң мәғлүмәт сараларының Башҡортостанға ҡарата "мөнәсәбәте". Ғөмүмән, Үҙәк баҫмаларҙың журналистары төбәктәрҙең һәм, айырыуса, милли төбәктәрҙең етәкселеген элек-электән, мәғлүмәтте йомоуҙа ғәйепләй торғайнылар. Йәнәһе, һөйләп еткермәйҙәр, йәнәһе, әйтеп бөтөрмәйҙәр. Мортаза Рәхимовты йомоҡлоҡта ғәйепләү мөмкин түгел. Ул һәр ваҡыт тураһын ярҙы. Һәм яра. Ельцин осоронда ла, Путин мәлендә лә. Әле лә. Башҡортлоҡ билдәһелер был. Башҡорт мәңге шулай тура ярып һөйләгән һәм эшләгән түгелме? Дүрт йөҙ илле ике йыл элек ата-бабаларыбыҙ "урыҫ халҡы менән бергә булырға кәрәк" тип бер әйткән икән, дүрт быуат ярым ваҡыт эсендә шул һүҙҙәргә башҡорттоң бер генә быуыны ла хыянат иткәне булманы. Ошо үҙе үк халыҡтар мөнәсәбәте араһындағы уникаль бер феномен булып сыға бит! Хәйер, һүҙем ситкә китеп бара буғай.

Эйе, Мортаза Рәхимов әйтһә, әйтә лә ҡуя. Тик, нишләптер, федераль матбуғат сараларының ҡайһы бер журналистары, Үҙәктең айырым вәкилдәре унын һүҙҙәрен үҙенсә аңлай. Уларҙын аңлау кимәле шулай ғына микән? Бер нәмәне һыҙыҡ өҫтөнә алып үтеү мөһим - Мәскәү журналистарын республикабыҙҙың уңыштары, ҡаҙаныштары ҡыҙыҡһындырмай. Әлбиттә, был аңлашыла: ауыл хужалығы, сәсеү, һауым, уңыш йыйып алыу, производстволағы яңылыҡтар, торлаҡ төҙөлөшө барышы, күп балалы ғаиләләр һаны артыуы хаҡында яҙыуы ҡыҙыҡ түгел дә баһа. Уны бер кем дә уҡымай, тип һанай улар. Ә бына күршенең күҙендә сүп эҙләү - уларҙың яратҡан эше. Һәр бер һүҙҙе, ымды, аҙымды, сығышты һәм ҡараште ҡырҡҡа төрләндереп, түңкәреп баштан аяҡҡа баҫтырыу - уларҙың шөғөлө. Нимәгә ҡаҙалдылар һуң журналистар һәм, бигерәк, ҡайһы бер сәйәсмәндәр Рәхимовҡа, тип һорайһығыҙмы? Рәхимовтың интервьюһындағы ҡайһы бер һүҙҙәр һәм һөйләмдәр оҡшамаған уларға.

Иң тәүҙә - власть вертикале хаҡындағы һүҙҙәре. "Тегге яҡҡа ла, был яҡҡа ла ташланыуҙар зарарлы. Артыҡ төбәкләштереү ҙә, үтә үҙәкләштереү ҙа яҡшыға килтермәйәсәк. Әле беҙ тап икенсе вариантты күҙәтәбеҙ. Федерализмдың мәғәнәһе - Үҙәк власть менән төбәктәр араһында уртаҡ тел табыуҙа. Беҙҙә власть вертикале хаҡында һөйләргә яраталар. Ә бит дәүләттең горизонталь ҡоролошо ла мөһим. Тик шул ваҡытта ғына республикаларҙың, өлкәләрҙең, халыҡтарҙың бар мәнфәғәттәрен иҫәпкә алырға була. Бөгөнгө шарттарҙа төбәктәргә вәкәләтлектәрҙе күберәк тапшырыу яғындамын", - ти Президент. Мортаза Рәхимовың федерализмға (һыҙыҡ өҫтөнә алып, әйтеп үтәйек, ҡағыҙҙағы ғына түгел, ә ысын, эшләгән федерализмға) мөнәсәбәте күптән билдәле. 1991 йылдан алып уҡ. Унын кеүек Рәсәй федерализмы нигеҙҙәрен яҡлаған кешеләр бик һирәктер. Рәсәй төбәктәренең бер нисә етәксеһе генә дәүләттең федераль ҡоролошоноң Үҙәк һәм төбәктәр өсөн әһәмиәтен күрә белде. Мортаза Рәхимов шуларҙың иң әүҙеме. Ул Рәсәй федерализмы нигеҙҙәренә тәүге таштарҙы тап башҡорттар һалғанын яҡшы белә һәм юғары баһалай. Тик унын ошо һүҙҙәрен ваҡытлы матбуғат саралары нисек ҡабул итә һуң? Рәсәйҙе тарҡатырға маташыу, тип. Ғәжәп түгелме ни? Дәүләт һәм йәмғиәтте механизм менән сағыштырыу урынһыҙыраҡ булһа ла, әйтәйем, гайкаларҙы туҡтауһыҙ бороп нығытырға маташырға ярамай. Юғиһә, уларҙың һыры боҙола һәм бөтөнләй яраҡһыҙға әүерелә. Бер нисә йыл элек террорсылар менән көрәшеүҙе сәбәп итеп, төбәк етәкселәрен һайлауҙы юҡҡа сығарып, уларҙы ил Президенты тарафынан тәғәйенләү ҡанунлаштырылғайны. Был сара ил сиктәрендә терроризм менән көрәшергә ниндәйҙер ярҙам күрһәтте микән? Кемдер анализлап ҡараһа ярай ҙа. Улайға китһә, быға тиклем һаҡланып килгән барлыҡ демократик принциптарҙан баш тартырға кәрәк булып сыға бит. Әлеге лә баяғы "дәүләтте һаҡлап ҡалыу маҡсаты" менән.

Бынан тыш, ҡайһы берәүҙәрҙең йөҙҙәрен Мортаза Рәхимовтың Дәүләт Думаһы эшмәкәрлеге хаҡындағы әйткәне нык ҡына сырылтты. Халҡыбыҙға хас булған кинәйә бар унын һүҙҙәрендә. "Дәүләт Думаһын ғына алып ҡарайыҡ. Шундай парламент буламы? Мин үҙ ваҡытында Юғары Совет ағзаһы булдым. Унда, буш залда, пианинола уйнаған кеүек, тауыш биреүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай ине. Халыҡ бөтәһен дә күрә бит!" Эйе, халыҡ күрә, белә, аңлап тора. Шуға ла Рәхимов, ошо халыҡтың бер вәкиле, халыҡ менән көн һайын аралашып торған етәксе булараҡ, Үҙәк властың көндән-көн юғала барған абруйы өсөн көйөнә. Диссидент шулайтыр ине микән?

Ә инде Мортаза Рәхимовтың "Берҙәм Рәсәй" партияһы хаҡындағы һүҙҙәре иһә ошо партияның ҡайһы бер вәкилдәрен сығырынан сығарҙы. "Берҙәм Рәсәй" партияһы Генераль Советы Президиумы секретарының урынбаҫары (!?) Андрей Исаев, мәҫәлән, Рәхимов партияны кәмһетте, мыҫҡыл итте, тип белдерҙе. Шундай оло вазифаға эйә булған кешене ниндәй һүҙҙәр шул хәтлем тетрәндерҙе икән, тип интервьюны күҙ йүгертеп үтәм. Бәлки, Рәхимовтың "Беҙҙә хәҙер бөтәһе лә өҫтән төшөрөлә. Үҙәкләштереү кимәле совет осорона ҡарағанда ла насарыраҡ", тип әйтеүе уға оҡшамағандыр? Әллә Мортаза Ғөбәйҙулла улының: "Берҙәм Рәсәй"ҙең нигеҙе аҫта, урындарҙа формалашырға тейеш. Беҙҙә әле был күренмәй. Өс тауыҡ менән идара итмәгәндәр партия руленә ынтылып маташа. Былай булыуы мөмкин микән?" - тигәне А. Исаевтың күңеленә ятмағандыр? Ә, бәлки, Исаев Мортаза Рәхимовтың "Асылда беҙҙә бөгөн бер партиялыҡ системаһы хөкөм һөрә. Шул уҡ ваҡытта һайлаусылар кемде һайлағанын да белмәй ҡала. Ә фракция етәкселәре депутаттарға: "Һин беҙгә оҡшамаһаң, ҡыуып сығарабыҙ!" тиҙәр. Был нимә була инде? Исмаһам, ихтирам тигән нәмә булырға тейеш тә баһа!" - тип әсенеүен яратмағандыр?

Ул хатта Мортаза Рәхимовты "Берҙәм Рәсәй" партияһынан ҡыуып та бөткәйне инде. Ярай әле, ул фирҡәлә бөтәһе лә Володин, йәки Исаев кеүек түгел. Айыҡ аҡыллы кешеләр ҙә бар. "Берҙәм Рәсәй"ҙең Юғары Советы рәйесе, Рәсәй Дәүләт Думаһы спикеры Борис Грызлов бөтәһен дә үҙ урынына ҡуйҙы. Ниндәйҙер ашығыс аҙымдар яһау тураһында һүҙ ҙә юҡ, партия тәнҡитте тыңларға, ишетергә, ҡабул итергә әҙер, тигән фекерҙе яңғыратты ул.

Әле Рәсәй матбуғат сараларында Мортаза Рәхимовҡа ҡарата мәғлүмәт һөжүме дауам итә. Яңы сығанаҡтар булмағас, иҫкеләрен һөйрәп сығара башланылар. Бер билдәле үҙәк гәзиттең (ойоштороусыһы - Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте) биттәрендә һәм рәсми сайтында Рәмил Бигнов, Николай Швецов ише республикала башҡорт милләтенә, Башҡортостан Республикаһы нигеҙҙәренә ҡаршы сығыш яһауҙары, илебеҙҙең, халыҡтарҙың тарихын боҙоп күрһәтеүҙәре (фальсификациялауҙары) менән "киң танылыу" тапҡан шәхестәргә һылтанып яҙылған мәҡәлә донъя күрҙе. Ҡыҙыҡ ҡына был донъя. Күп йылдар буйына эре, ҡеүәтле төбәк менән идара итеп, Рәсәй кимәлендә генә түгел, халыҡ-ара кимәлдә абруй ҡаҙанған шәхестең илдең киләсәге хаҡында йөрәк төбөнән сыҡҡан һүҙҙәренә ышаныс юҡ. Ә йыйын әтргәләмдәргә, буш ҡыуыҡтарға һәм фальсификаторҙарға - бар.

Ишетә белмәйҙәрме? Аңлай алмайҙармы?

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы Ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам күрһәтеү республика үҙәге менән берлектә 16 июндә өйрәтеү семинары үткәрә. Сара башҡорт телендә социаль-психологик һәм коррекцион эштәр буйынса практик эшмәкәрлек төрҙәре һәм алымдары менән таныштырыу маҡсатында үткәрелә. Семинар Салауат районында үткәреләсәк.

✓ География һәм әҙәбиәт фәненән бирелгән БДИ һөҙмтәләре билдәле булды. Әҙәбиәт буйынса республикала 1047, географиянан 855 бала БДИ тапшырған. 31-әр бала һынауҙы тапшыра алмаған. Ә Рәсәй буйынса 33 мең бала - географиянан, 48 меңе әҙәбиәттән БДИ тапшырған. Географиянан уларҙың 10,1 проценты, әҙәбиәттән 6,5 проценты БДИ-ны тапшыра алмаған. Һайлап алынған предметтарҙан БДИ тапшырыу аттестат алыу-алмауға тәьҫир итә алмай. Балл менән риза булмағандар Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтына 15 июндә апелляция тураһында ғариза бирә ала. Конфликт комиссияһы 16 июндә 14 сәғәттән 18 сәғәткә тиклем эшләйәсәк.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек тикшерелде. Билдәләнелеүенсә, республикала йәшәүсе һуғыш ветерандарының 338-е, шуларҙың 150-һе Өфөлә, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж. Улар 2005 йылдың 1 мартына тиклем иҫәпкә ҡуйылған һәм РФ Президенты Указы буйынса, 2010 йылдың 1 майына тиклем торлаҡлы булырға тейеш. Шулай уҡ 2005 йылдан һуңыраҡ иҫәпкә ҡуйылған тағы 206 ветеран муниципаль бюджет иҫәбенә торлаҡ менән тәьмин ителергә мөмкин.

✓ Байрам көндәрендә Спорт һарайы майҙанында ауыл хужалығы йәрминкәһе үтте. Унда республиканың 29 районынан Башпотребсоюз предприятиелары ҡатнашты, 100-ләп сауҙа урыны ойошторолдо.

✓ Сит ил граждандарын эшкә йәлеп итеү киләһе йылда тағы ла ҡыҫҡартылыуы мөмкин, тип белдерҙеләр БР Хөкүмәте ултырышында. Быйыл финанс көрсөгө менән бәйле гастарбайтерҙарҙы эшкә йәлеп итеү квотаһы 36900 мендән 28900 кешегә кәметелгәйне. Ә 2010 йылда уларҙың һаны 23400 кешегә генә ҡалырға мөмкин.

✓ Бүлек көнөнә 250-300 пациентты ҡабул итеү мөмкинлегенә эйә. Һупайлы халҡы өсөн тағы ла бер һөйөнсө - тиҙҙән мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн 25 урынлы көндөҙгө стационар асыласаҡ.



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# РӘСӘЙ МӘКТӘПТӘРЕНДӘ...

## ...БДИ һатылмай

**Ҡыҙыу имтихандар осоронда интернетта күпмелер аҡса түләп, БДИ һөҙөмтәләрен белергә тәҡдим итеүселәр барлыҡҡа килде. Рособрнадзор сығарылыш уҡыусыларын һәм уларҙың ата-әсәһен бындай хеҙмәт юҡлығы тураһында иҫкәртә.**

Эш шунда: быйыл Рособрнадзор интернетта БДИ тапшырыусы һәр уҡыусының һөҙөмтәләрен баҫыуҙан баш тартты. Был персональ мәғлүмәттәрҙе һаҡлау маҡсатында эшләнә. Быйылғы сығарылыш уҡыусылары имтихан һөҙөмтәләрен үҙҙәре уҡыған мәктәптә, ә ҡалған ҡатнашыусылар имтихан тапшырырға рөхсәт алған ерҙә, ҡағыҙә булараҡ, урындағы мәғариф идаралығында белә ала.

Быйыл БДИ-ла осраған тәртип боҙоуҙар араһында аудиторияға кәрәҙле телефон һәм башҡа бәйләнеш саралары индереп, улар менән ҡулланырға тырышыусылар булған. Шуға ла Рособрнадзор РФ субъекттарына БДИ ҡатнашыусыларының телефондары һүндерелеп, ойоштороусыларға тапшырылырға тейешлеген белдергән рәсми хат ебәргән.

Төбәктәрҙә БДИ тапшырған ваҡытта административ һәм дөйөм контроль алып барылырға тейеш ине, шуға ла унда нимәнелер йәшереүе ауыр булғандыр, тип фараз итергә ҡала. Имтихан ҡабул итеү пунктында һәр 15 уҡыусыға ике күҙәтеүсе тура килә. Күҙәтеүселәр икенсе мәктәптәрҙән саҡырыла һәм улар имтихан барған фән уҡытыусыһы булырға тейеш түгел.

## ...психология серҙәре өйрәтеләсәк

**Тиҙҙән Рәсәй мәктәптәрендә кеше психологияһының анатомияһы тип аталған яңы фән уҡытыла башлауы ихтимал.**

Бындай тәҡдим менән Сербский исемендәге дәүләт фәнни социаль һәм суд психиатрияһы үҙәге белгестәре сығыш яһаған. Уларҙың фекеренсә, Рәсәй балаларының "тәрән психологик соҡорҙан" сығырға "агрессив мәғлүмәти кинлек" ҡамасаулай. Психология анатомияһында балалар психологик нескәлектәрен өйрәнәсәк. Дисциплина баланың шәхес булараҡ формалашыуына ярҙам итергә тейеш була. Тәүҙә был фән эксперимент рәүешендә Мәскәү мәктәптәрендә индереләсәк.

## ...мәғлүмәт ҡулланыусыһы әҙерләнәсәк

**Мәскәү мәктәптәрендә медиа белеме биреүсе курс асырға ла уйлайҙар.**

Бында балаларҙы матбуғат сараларын тәнҡитләргә һәм үҙҙәренә периодик баҫмалар сығарырға өйрәтергә теләйҙәр. Яңы фән әҙем, өлгөрөп еткән мәғлүмәт йәмғиәте ҡулланыусыһын әҙерләйәсәк. Бындай курсты гуманитар белем биреү учреждениеларына мотлаҡ, башҡа уҡыу йорттарына факультатив итеп индереү ҙә ҡарала.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Был көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов, Хөкүмәт Премьер-министры Раил Сарбаев һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев Өфө ҡалаһының дауалау учреждениеларында - 17-се ҡала балалар клиник дауаханаһында, 21-се клиник дауаханаһында барған капиталь ремонт эштәре, 5-се балалар поликлиникаһының яңы филиалын асыуға әҙерлек барышы менән танышты.**

# ЕТӘКСЕЛӘР...

## шатлыҡ уртаҡлаша

● Баш ҡаланың 17-се балалар клиник дауаханаһы көндән-көн төҙөклөнә, күркәмләнә, уның төп корпусында реконструкция эштәре тулы ҡеүәт менән бара. 1972 йылда төҙөлгән биш ҡатлы был бинаға капиталь ремонт уҙғарыуға 90 миллион һум аҡса бүленгән. Бында санитар талаптарға тап килерлек итеп инженер селтәр-



ҙәрен тулыһынса яңыртыу ҡаралған. Дауаханалағы эш барышы менән танышҡанда етәкселәр тарафынан медицина учреждениеһы биләмәһендә балалар уйын майҙансығы ҡуйыу тәҡдим ителде. Бынан тыш, дауаханаға ашығыс рәүештә ҡайһы бер ҡоролмалар ҙа кәрәклеге асыҡланды. Мәсәлән, компьютер томографы ныҡ иҫкергән, шуға ла ауыр хәлдәге ауырыуҙарҙы Республика балалар клиник дауаханаһына алып барырға тура килә. Президент был мәсьәләне хәл итеү буйынса ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе.

● 21-се ҡала клиник дауаханаһың операция блогында ете йыл барған реконструкция эштәре тамамланыу өҫтөндә. Дауаханаһың баш табибы Нәзир Хафизов әйтеүенсә, меңдән артыҡ кешегә иҫәпләнгән медицина учреждениеһы заманса операция бүлмәләренә мохтажлыҡ кисергән. Бында көн һайын 25 ҙур операция уҙғарыла, стационарға 280 тирәһе ауырыу ҡабул ителә. Президент блоктың үҙәк стерилизация бүлегендәге кер һәм медицина инструменттарын эшкәртеү өсөн тәғәйенләнгән яңы ҡоролмалар менән танышты. Был ҡоролмаларҙы ҡулланыу вирус гепатитына ҡаршы яҡшы профилактика булып тора. Республика етәксеһе шулай уҡ интенсив терапия палаталарын-реанимацияны ҡарап сыҡты. Улар алты кешегә иҫәпләнгән һәм заманса яңы медицина техникалары менән йыһазландырылған. Операция блогында лороперация, нейрохирургия, травматология кеүек төрлө йүнәлештәге операция залдары бар. Нәзир Хафизов Президентҡа бөйөрҙәге һәм бәүел юлындағы таштарҙы ваҡлау өсөн тәғәйенләнгән "Лазурит" маркалы аппараттарҙы һәм шулай уҡ лапароскопия үткәреү аппараттарын күрһәтте.



● Быйыл Һупайлы биҫтәһенең Маршал Жуков урамында урынлашҡан 5-се балалар поликлиникаһының яңы филиалы үҙ ишектәрен асасаҡ. Филиал бер сменала өс йөҙ кешене ҡабул итеүгә иҫәпләнгән. Бында балалар тәү медицина ярҙамын 12 педиатр участкаларында алаҫаҡ. Аллергология-иммунология, гастроэнтерология, балалар кардиологияһы, балалар эндокринологияһы, йоғошло ауырыуҙар һәм башҡа йүнәлештәге 25 специальность буйынса табибтар әҙерләнгән дә инде. Ауырыуҙарҙы элекке хәленә ҡайтарыу бүлеге айырым иғтибарҙы йәлеп итә. Дөйөм ҡабул ителгән физиотерапевтик процедуралардан тыш, реабилитация курсы парафинотерапия, ванна инеү, бассейндағы дауалау физкультураһын үҙ эсенә аласаҡ. Бүлек көнөнә 250-300 пациентты ҡабул итеү мөмкинлегенә эйә. Һупайлы халҡы өсөн тағы ла бер һөйөнсө - тиҙҙән мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн 25 урынлы көндөҙгө стационар асыласаҡ. Шулай уҡ функциональ диагностика бүлегенең асылыуы ла ҡыуаныслы хәл. Бында ультразвуклы диагностика, электрокардиография, электроэнцефалография, эхокардиография, реоэнцефалография һәм спирография эшләнәсәк. Рентген тикшеренеүҙәр заманса аппаратта үткәреләсәк.

**Әйткәндәй...**

**Өфө ҡалаһының Менделеев урамында 248-се һанлы балалар баҡсаһын асыу байрам көндәре уңайынан матур бүләк булды. Был шатлыҡлы ваҡиғаны балалар баҡсаһының хеҙмәткәрҙәре, тәрбиәләнеүселәре һәм ата-әсәләр менән Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов уртаҡлашты. 140 урынға иҫәпләнгән балалар баҡсаһында ике йәштән алып һигеҙ йәшкә тиклемге балалар өсөн һигеҙ төркөм, шулай уҡ психик үҫеше артта ҡалған балалар өсөн ике коррекцион төркөм булдырыу ҡаралған. Балаларҙың үҫеш кимәлен ике дефектолог һәм ике логопед күҙәтәсәк. Учреждение мөдире Ирина Ютова әйтеүенсә, башҡорт телен өйрәнеүгә һәм телмәр үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленәсәк. Балаларҙы художестволы зауыҡҡа һәм ҡайһы бер файҙалы һөләттәргә музыка һәм физкультура залдарында, һүрәт төшөрөү һәм театр студияларында, оҫтаханаларҙа үткән дәрестәр ярҙам итәсәк. Тәрбиәләнеүселәр шулай уҡ асыҡ һауала урынлашҡан физкультура һәм уйын майҙансыҡтарында сәләмәтлектәрен яҡшырта аласаҡ.**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡалала быйыл тәүгә ярты йыллыҡта алып барылған төҙөклөндереү эштәре тураһында мәғлүмәт тыңланды. Бурыс - төҙөлөш эштәренең сифатын күтәреү, автоюлдар селтәрен камиллаштырыу һәм уларҙың техник торошон яҡшыртыу. Ҡала биләмәһенең архитектура-художество биҙәлешенә айырым иғтибар бүленә. Вертикаль ландшафт биҙәлеш, заманса туҡталыш павильондары урынлаштырыу буйынса эштәр дауам итә.

✓Һуңғы йылдарҙа баш ҡала урамдары һәм майҙандарында яһалған яңы алып таусыҡтары яһау, клумба һәм газондар биҙәлеше бар халыҡтың иғтибарын йәлеп итә. Быйыл 157 мең кв метр майҙанда яңы газондар төҙөкләндерелгән, уларҙа 453 сәскә вазондары ҡуйылған, парктарҙа, сквер, ихаталарҙа 13515 урна һәм 7333 эскәмйә урынлаштырылған.

✓"Юбилей" мәҙәниәт һарайында Башҡорт дәүләт аграр университетын 2009 йылда тамамлаусылар БР Премьер-министры Раил Сарбаев менән осрашты. Сарала республиканың мәғариф, урман, тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлыҡтары, ойошма, предприятие етәкселәре, районлар хакимиәттәре башлыҡтары ҡатнашты. Быйыл аграр университетты 20 һөнәр буйынса бөтәһе бер меңдән ашыу кеше тамамлай. Шуларҙың 400-ө маҡсатлы йүнәлеш буйынса белем алған, улар мотлаҡ тыуған районлдарына эшкә ҡайтасаҡ. Белеүегеҙсә, БР Президенты Указы менән ауылға ҡайтып эш башлаусы юғары белемле белгестәр - 100-әр мең, урта махсус уҡыу йортон тамамлаусылар 60-ар мең һум күләмендә аҡсалата ярҙам аласаҡ.

✓Республикала 10 июндән 20-һенә тиклем Халыҡ-ара наркоманлыҡ һәм наркобизнес менән көрәш көнө сиктәрендә "Кайҙа үлем менән һатыу итәләр - хәбәр ит" тигән Бөтә Рәсәй акцияһы үтә. Акцияла ҡатнашыусылар тәүлек әйләнәһенә 8-800-347-20-30 ышаныс телефонына шылтырата ала. Быйыл республика наркоконтроленең ышаныс телефоны наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше тураһында 320 хәбәр ҡабул иткән.

*АФАРИН!*

# РУХ КӨҪӘП...

## Баймаҡ районында Милли матбуғат аҙналығы "Ҡорама байрамы" менән йәнәш үтте







**(Башы 1-се биттә).**

Ҡор үтәсәк урынға килеп етер-етмәҫтән, ҡала урамының гәҙәтилеген юйып, өҙә баҫып атлап килгән, берегенән-береһе матур милли күлдәкле, аҡ ҡушъяулыҡлы инәйҙәр юлыбыҙға осраны. Ситтән килгән юлдаштарым гәжәпләнеүен белдермәй ҡалманы: "Быңдай күренеш Баймаҡ ерендә генә мөмкиндер ул!"

Йыйылыу урыны билдәле - районның халыҡ ижады үҙәге. Ә унда барып инһәң... Бал ҡорттары күселәй гөж килә был тиктормаҫ, хәрәкәтсән матурлыҡ. Ихлас инәйҙәр ыңғайына йылмая-йылмая, уларҙың һөйләгәндәрен тыңлайтыңлай, тырышып-көҙләп теккән ҡорамаларының матурлығына һоҡлана-һоҡлана дөйөм ағымға кинәнеп сумғанды һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ.

***

-Ни өсөн беҙ был йыйынға тап ололарҙы саҡырырға булдыҡ? Милли матбуғат - милләттең рухи терәге ул. Ә оло- лар - милләттең йүнәлешен билдәләүселәр, - тип башланы һүҙен Ярат ауылы ағинәйҙәре һәм аҡһаҡалдары ҡорған аҡ тирмәләге һөйләшеүҙе район ҡатын-ҡыҙҙары советы рәйесе Луиза Дәүләтшина.

Баймаҡтағы уҡыусылары менән осрашырға, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшергә райондың "Һаҡмар", төбәктең "Атайсал", "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәре, "Башҡортостан ҡыҙы", "Һәнәк" журналдары мөхәррирҙәре һәм хәбәрселәре килгәйне. Быйыл 10 йәшен тултырасаҡ "Һаҡмар", әлбиттә, район халҡына иң яҡын матбуғат баҫмаһы - уны һәр өйҙә тиерлек алдыралар. Ләкин гәзиттең баш мөхәррире Илһам Йәндәүләтовтың башҡа милли баҫмалар өсөн дә йөрәге яна. "Кәҙерле ағинәйҙәр менән аҡһаҡалдар, ҡайһы ғына йыйындарҙа йөрөһәгеҙ ҙә, йәштәрҙе милли баҫмаларыбыҙға яҙылырға өгөтләп йөрөгеҙ!"- тигән үтенесен белдерҙе ул йыйылыусыларға.

Эйе, үрҙә әйтелгәнсә, бик иғтибарлы һәм әүҙем уҡыусылар күңеленә ярай белеү ҙә еңел түгелдер. Был хаҡта республика ҡатын-ҡыҙҙары журналының баш мөхәррире Йомабикә Ильясова әйтеп үтте: " Һәр ваҡыт ҡыуанып киләм һеҙгә. Эске яҡтылыҡ, күңел йылылығы алып ҡайтам. Бөгөнгө ваҡытта, рухи ҡиммәттәр селпәрәмә килгәндә, һеҙ оло хазинаны - рух байлығын һаҡлап килмәһегеҙ. Һеҙҙең һымаҡ халыҡтың ышанысын яулау беҙгә, журналистарға, ҙур баһа".

Баймаҡ районы иң йәш милли баҫма - "Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡыу буйынса ла алда бара. "Йөрәктәр бер-береһен ишетһә, кешеләр ипле генә, тыныс ҡына, боғаҙ йыртмай ғына һөйләшә, ишара һәм кинәйәләрҙән дә күпте аңлай. "Киске Өфө"нөң йөкмәткеһе лә шундайыраҡ - кинәйәле, артыҡ ҡысҡырып тормай, әммә һәр һүҙе сәпкә лә, сәмгә лә тейә. Артабан да бер-беребеҙҙе ишетеп, аңлап, кәңәштәр һәм фекерҙәр уртаҡлашып йәшәйек", - тине "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева.

Аҡ тирмә көмбәҙе аҫтындағы ҡорҙа баймаҡтарҙың тоғролоғона, һөйөүенә лайыҡ тағы бер гәзит - "Йәшлек" исеменән уның үҙ хәбәрсеһе Баныу Ҡаһарманова, көньяҡ районлар араһындағы "рухи күпер" ролен үтәгән "Атайсал" гәзите мөхәррире Шафиҡ Ноғоманов, һуңғы йылдарҙа төбәктәге тиражын арттыра барған "Һәнәк" журналы хәбәрсеһе Венер Исхаҡов та уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты.

***

Ярат ауылы биләмәһе советы рәйесе Гүҙәл Монасипова әйтеүенсә, уларҙың биләмәһенә ингән ауылдарҙа туған телебеҙҙәге һәр бер баҫманы яҙҙырған кешеләр бар. Ауыл старосталарының ярҙамына таянып эшләгән уңған етәксе үҙе лә иң әүҙем ғаиләләргә теге йәки был баҫманы яҙҙырып бүләк итергә гәҙәтләнгән. Ошондай уҡ күркәм гәҙәте хаҡында районның "Атайсал" клубы рәйесе Рауил Буканбаев та һөйләп үтте: "Туғандарымдың, ейән-ейәнсәрҙәремдең тормошондағы ҡыуаныслы ваҡиғалар айҡанлы бүләккә ҡушып, башҡорт баҫмаһына яҙылып бүләк итеү гәҙәтем дә бар", - тине Рауил Яҡуп улы. Ҡорҙа ҡатнашыусылар аҡһаҡалдың "Бүләккә - милли матбуғат" тигән был башланғысын бер тауыштан хуплап сыҡты. Ә Ҡаратал ауылы ағинәйҙәре исеменән сығыш яһаған Сәлимә апай Йәндәүләтова, аҡһаҡалдың был фекерен дауам итеп, туған телдәге баҫмаларға әхлаҡи яҡтан "аҡһаған" ғаиләләрҙе яҙҙырыу кәрәклеген да телгә алды - тормош юлында аҙашҡан бәндәнең йөрәгенә әҙәп, иман хаҡындағы уй ниндәй юсыл менән үтеп инерен кем белә?.. Бер күҙ һалмаһа, бер һалыр ул кеше, бер уҡымаһа, бер уҡыр һин бүләк иткән гәзит-журналды...

***

Ә күргәҙмә!... Ниндәй генә ижад емештәре булманы бында: ҡорама түшәктәр, ҡорама юрғандар, ҡорама өҫтәл япмалары, ҡорама янсыҡтар һәм башҡалар. Ә бит, тәү ҡарашҡа ябай күренһә лә, ҡорама бер ҙә бөгөн тегеп, иртәгә әҙер була торған әйбер түгел - уны ижад итеү өсөн күпме ныҡышмалылыҡ, сабырлыҡ, зауыҡ кәрәк. Ҡорама ҡорауҙың элек- электән ҡулланылған ысулдары буйынса ла, заманса алымдарын да ҡулланып ижад ителгән был әйберҙәр.

- Һеҙ бит был эштәрегеҙ менән үҙегеҙҙе сәнғәт юғарылығына күтәрәһегеҙ!.. - матурлыҡты баһалай белгән шағирә Йомабикә Ильясованың һоҡланыу һүҙҙәре, моғайын, оҫта ҡуллы апай-инәйҙәрҙең йөрәгенә май булып ятҡандыр.

Ҡырҡтан ашыу ҡорама оҫтаһы ҡатнашҡан бәйгелә Гран-приға Ишбирҙе ауылынан Мөнирә Ғайсина лайыҡ булды.

***

Баймаҡ ерендәге ҡорама конкурсының финалы фәҡәт Милли матбуғат аҙналығы сиктәрендә үтеүе осраҡлы түгел - тап оло быуын кешеләре, ошондай ағинәйҙәр менән аҡһаҡалдар бөгөн милли баҫмаларҙың төп таянысы булып ҡала. Ә ҡорамаларға электәнән битараф ҡарай алмайым мин. Был юлы ла сағыу туҡыма киҫәктәренән өскөлләп-дүрткелләп тегелгән ҡул эштәрен йәнә берҙә күреү форсатына ихлас ҡыуанып йөрөгәндә, башҡа шундай сағыштырыу килде - милли баҫмаларыбыҙ ҙа бит ҡорама рәүешендәге бихисап төҫлө сағыу бер келәмдәй. Туған телебеҙҙәге мәғлүмәти мөхиттә лә һәр бер баҫманың үҙ урыны, үҙ йәме, үҙ бәҫе... Береһе тыйнағыраҡ, баҫалҡыраҡ "төҫтә", икенсеһе күҙҙе ҡамаштырырлыҡ, һәм барыһы бер-берененең баҙыҡлығын арттырғандай. Һәр береһе әйтер һүҙен үҙенсә әйтә, тауышы йә интонациялары төрлө, ләкин, асылда, барыһы ла милләтен бер үк изге маҡсаттарға - илде, эште һөйөргә, иманлы йәшәргә, башҡорттоң лайыҡлы улдары һәм ҡыҙҙары булырға өндәй.

**Гүҙәл БАЙҒОТЛИНА.**
**Баймаҡ районы.**

---

**Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы**

## Дегәнәк, юл үләне, меңъяпраҡ



Башҡорттар таҙа, файҙалы ғына ризыҡтар ашап, йәй буйы ҡымыҙ, күҙә, ҡорот иҙеп эскәнгә күрә һау булған. Балалар ҙа сиргә бирешеп бармаған. Өй эсенә хуш еҫле мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, башҡа төрлө үләндәр бәйләме элгәндәр, бигерәк тә артыштың һаҡлау көсөн белеп, яңынан-яңыға алыштырып торғандар. Хәҙер артыш сайырға, фитонцидтарға бай икәнен яҡшы беләбеҙ. Тимәк, борон үләндәрҙе өйҙә күберәк профилактик сара итеп тотҡандар булып сыға. Мәҫәлән, дегәнәк тәндең торошон нығыта һәм ауырыуҙарға ҡаршы тороу һәләтен күтәрә, тип белгәндәр. Төрлө яраларҙы тиҙ йүнәлтеүен күреп, юл үләненең япрағын алып, сайҡатып, ашҡаҙан, эсәк сирле кешегә йәй буйы ашар алдынан сәйнәп, һутын йотоға кәңәш биргәндәр. Әле беҙ бәләкәй саҡта Нәғимә исемле инәй беҙҙән юл япрағын йыйҙыра ла, сайҡап, шуны сәйнәй ине.

Шулай уҡ ҡан тамырҙары киңәйеп, аяҡтары һыҙлап, йоҡлап китергә ҡамаусалағанда, инәйҙәр дегәнәк япрағын һалҡын һыуҙа сайҡатып, аҫҡы яғы менән аяҡтарына урай инеләр. Был осраҡта япраҡтарҙы төнө буйы тоторға кәрәк. Шул уҡ дегәнәк япраҡтарын эҫе һыуҙа сайҡатып, быуындар һыҙлағанда урап, файҙаһын күргәндәр. Ә дегәнәк тамырының ҡайнатмаһын сәс төптәренә ышҡып һөртөп, ҡатын-ҡыҙ сәстәрен бөгәренә төшөп торорлоҡ итеп үҫтерә алған.

Эсәк, ашҡаҙаны боросоған кешегә ҡара көҙҙә (октябрь айында) ҡаҙып алынған дегәнәк тамырына юл үләне япрағын, меңъяпраҡты бер тигеҙ ҡушып, төнәтмәһен айҙар буйына эсергә ҡушҡандар. Үлән төнәтмәһен икеөс көн эсеүҙән файҙаһы булмай, яҡшы һөҙөмтәгә ирешәм, тиһәң, уны ике айлап эсергә кәрәк.

Еребеҙҙә үҫкән һәр үлән дауа, тик уларҙа тамыры менән йолҡоп алырға ярамай. Үләнде күп итеп һалып ҡайнатып эсһәң - ул ағыу, самаһын белеп ҡулланғанда -дарыу.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ДАЛА КҮРКЕ БИТ АСЫЛЫКҮЛ

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсын үткәреүҙе ихлас күңелдән хуплайым. Конкурстың һөҙөмтәләре республикабыҙҙың аҫыл тәбиғәт һәм рухиәт ҡомартҡыларын пропагандалау, әҙәм балаларының аңында экологик мәҙәниәт тәрбиәләү йәһәтенән дә бик әһәмиәтле буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың мөғжизәләре ете һаны менән генә сикләнмәүе тураһында ла әйтеп үтмәксемен. Йәғни иң-иңдәр рәтендә ете мөғжизәне билдәләү менән генә туҡталып ҡалмайыҡ, тимәксемен. Ә инде иң атаҡлы ҡомартҡыларыбыҙ араһында, ошоға тиклем гәзит биттәрендә баҫылып сыҡҡан тәҡдимдәргә ҡушылып, мин дә иң тәүгеләр рәтендә ҡурай моңон һәм башҡорттоң донъяла тиңе булмаған оҙон көйлө йырҙарын, бөйөк "Урал батыр" эпосын, Салауат Юлаев һәйкәлен, Шүлгәнташ мәмерйәһен һәм уның таш быуат дәүеренән ҡалған һүрәттәре, изге Ирәмәлебеҙ менән Агиҙелкәйебеҙҙе, Янгантау менән Торатауҙы атар инем. Бына етенән артып та китте. Ә мин бит тағы ла бер мөғжизә хаҡында әйтеп үтмәксе инем. Әйткәс, әйтәйем инде.**

Башҡортостан картаһына күҙ һалһағыҙ, республиканың көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә, Дәүләкән һәм Бүздәк районҙарының ике араһында гәйәт ҙур һыу ятҡылығын күрерһегеҙ. "Гәйәт ҙур" тиеү генә дөрөҫ булмаҫ: беҙҙең күлдәребеҙҙең иң ҙурыһы ул - Асылыкүл. Төньяҡтан көньяҡҡа табан күҙ күреме ерҙәргә йәйрәп ята уның һыуҙары. Асылыкүлдең буйы - 8, киңлеге 5 километр, майҙаны 18 квадрат километр. Иң тәрән урындары 7 метрға етә. Асылыкүл 1962 йылда Бөтә Союз әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡылары иҫәбенә индерелгән. Дөрөҫөрәге, ул комплекслы һәм бик һирәк ҡомартҡыларҙың береһе. Геология һәм география, ботаника һәм зоология күҙлегенән күл һәм уның әйләнә-тирәһе бик яҡшы өйрәнелгән. Уның хаҡында бындай мәғлүмәттәр "Башҡортостандың тәбиғәт ҡомартҡылары" тигән белешмәләрендә, туристарҙың юл күрһәткестәрендә урын алған. Шул уҡ ваҡытта, үкенескә ҡаршы, был белешмәләрҙә Асылыкүлдең уникаль культура ҡомартҡыһы булыуы бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Әммә был төбәктең башҡорт халҡының рух культура тарихында айырыуса ҡиммәтле урын алыуы тураһында ентеклерәк әйтеп үтмәйенсә мөмкин түгел.

Йәмле Асылыкүл буйҙары башҡорт халҡының "Заятүләк менән Һыуһылыу" исемле илаһи поэтик эпосына ҡанат биргән һоҡланғыс бер төйәк булыуы менән бигерәк тә ҡәҙерле. Был йәһәттән ул ер йыр-моң байлығы менән дан тотҡан Бөрйән, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Учалы, Ейәнсура йәки Арғаяш, Ҡоншаҡ яҡтарына йәнәш ҡуйырлыҡ. Нәҡ шуның өсөн дә Асылыкүл буйы башҡорттары һәм улар ижад иткән һоҡланғыс эпик әҫәр уҙған быуатта уҡ ил өйрәнеүсе ғалим һәм яҙыусыларҙың иғтибарын йәлеп иткән. Атаҡлы рус лексикографы В. И. Даль, мәҫәлән, 1843 йылда "Башҡорт һыу инәһе" тигән баш аҫтында "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосын "Москвитянин" журналында, рус теленә ирекле тәржемә итеп, донъяға сығара. Унан һуң Л. Суходольский "Түләк тураһында башҡорт легендаһы"н баҫтыра ("Оренбургские губернские ведомости", 1858, № 46, 193-196-сы биттәр). Күренекле ғалим-этнограф Г. Н. Потанин "Дала эпосында дингеҙ ҡыҙы" тигән мәҡәләһендә башҡорт эпосы "Заятүләк" хаҡында юғары һүҙҙәр әйтә. 1909 йылда иһә Асылыкүл буйы башҡорттары Мәжит Ғафуриға "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙың бер нисә ҡульяҙмаһын тоттора һәм шағир, әлеге ҡульяҙмаларҙан күсереп алып, әҫәрҙе 1910 йылда Өфөлә "Заятүләк берлә Һыуһылыу" тигән исем аҫтында баҫтырып сығара.

Баҫманың инеш һүҙендә М. Ғафури гәйәт ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә.



Бына шунан бер нисә өҙөк: "Бынан бер нисә йыл элек мәшһүр бер кешенең ғаиләләре менән Бәләбәй өйәҙендәге башҡорттар араһына, Асылыкүл буйына, барғайным. Унда барыуҙан маҡсатым, бер йәһәттән, күңел асыу һәм ял итеү, матур күл буйын күреү, икенсе яҡтан, Асылыкүл тирәһендәге күптән бирле үҙҙәренең башҡортлоҡтарын, гөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап килгән башҡорттарҙы күреү, иҫке, моңло, дәртле милли көйҙәрен ишетеү ине. Ысынлап та, улар был көнгә саҡлы иҫке гөрөф-ғәҙәттәрен, йыр-көйҙәрен ысын көйөнсә һаҡлап килә алғандар."

"Беҙ, Асылыкүл буйына килеп төшкәс тә, тәңкә кеүек күл буйына, йәшел үлән өҫтөнә сатырҙарҙы ҡорҙоҡ. Күлдән йыраҡ түгел Ҡаңны, Сапай тигән ауылдарҙан ҡурайсылар һәм йырсылар килтерттек.

Мин, сысҡан көтөп ултырған бесәй кеүек, ҡурай уйнаған һәм йырлаған башҡорттарҙың ауыҙҙарына ҡарап, башҡа нәмәләрҙе тамам онотоп, ҡурайға ҡушылған моңло тауышты ысын күңелем менән тыңлай инем. Башҡорттарым "Ҡара юрға", "Өйҙәрәк", "Таштуғай", "Ашҡаҙар", "Тәфтиләү", "Һаҡмар", "Ҡөрән юрға", "Кантондар" тигән көйҙәрҙе берәм-берәм һыҙҙыралар ине".

Шағир шулай, йыр-көйҙәр тыңлап, "көйҙәрҙең исемдәрен, ни сәбәпле сығарылғанлыҡтарын", йәғни йыр-көй тарихтарын һорашып ултыра торғас, уға "Заятүләк" көйөн уйнап, йырлап та күрһәтәләр. "Заятүләк кем һуң ул?" - тигән һорауға янында ултырған башҡорт ағай бороңғо эпос тураһында һөйләп алып китә:

- Ана унда Заятүләк ташы бар, һәм бынан 15 саҡрым ерҙә, ана, күгәреп күренгән Балҡан тауында, уның ҡәбере бар. Был күлдең уртаһы бик тәрән... - тип бөтөргәс: - Заятүләк тигән китап та бар, - тип өҫтәй.

Бына шунда Асылыкүл башҡорттары М. Ғафуриға үҙҙәрендә борон-борондан һаҡланған эпик әҫәрҙең бер нисә ҡульяҙмаһын тапшыра.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" башҡорт фольклорының алтын фондына ингән һоҡланғыс лиро-эпик әҫәрҙәрҙең береһе. Был эпостың тылсымлы поэтикаһы, саф мөхәббәт тойғолары уны элек-электән башҡорт халҡының иң яратҡан ауыҙ-тел һәм ҡульяҙма ҡомартҡылары рәтенә ҡуйған.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" башҡорт халыҡ ижады томдарында ҡат-ҡат баҫылып сыҡты. Үрҙә телгә алынғандарынан тыш, башҡорт фольклосылары уның йәнә тиҫтә ярым самаһы вариантын яҙып алған.

Был эпос - Асылыкүлгә һәм Балҡантауға ысын-ысындан шиғри һәйкәл ул. Күлдең әйләнә-тирәһен, бындағы тәбиғәт байлығын һәм тәбиғәт күркәмлеген, йәнлектәр донъяһын, тауҙарҙы, таштарҙы - һәммә нәмәне ниндәй һөйөү һәм илһам менән тасуир итә бороңғо башҡорт шағиры. Бына сәсән телле Заятүләктең Балҡантауға ҡарап әйткән өләндәре:

Айры ҡойроҡ, йылтан күҙ
Ҡасҡары күп Балҡантау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шәм ҡолаҡ
Ҡуяны күп Балҡантау;
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән,
Төлкөһө күп Балҡантау;
Оя яһар ере күп,
Ҡоштары күп Балҡантау.

Эпоста раҫланыуынса, Заятүләк менән Һыуһылыу ошо тау башына күмелгән, ғәҙел батыр менән Һыуһылыуҙы түбәһендә һаҡлаған Балҡан тауы Дим буйы башҡорттарының изге урынына әйләнә.

Асылыкүл буйының (күлдең бигерәк тә көньяғында) Ҡарағас тауҙары, Түләк (Заятүләк ташы), Һыуһылыу ташы (Һыуһылыуҙың сәс тараған ташы), Өйҙәрәк башы тигән ерҙәр ҙә эпос геройҙарының исемдәре һәм әҫәрҙәге ваҡиғалар менән бәйле. Географик әҙәбиәттә Ҡарағас тауҙары икәү тип күрһәтелә. Эпоста иһә "күлдең әлеге төшлөк яғындағы Ҡарағас тигән ярҙың өҫтөндәге оло тау" Ҡашҡатау тип әйтелә. "Ҡашҡа (йәғни үлән үҫмәгән) тауҙың өҫтө, Заятүләктең аты кимереп торғанға күрә, һаман үлән үҫмәйенсә, таҡыр, яланғас булып яталыр, тиҙәр". Әҫәрҙә, күренеүенсә, тау башының таҡыр булыуы ла поэтик биҙәк ролен үтәй, художестволы һүрәтләү сараһы итеп ҡулланыла.

Эпоста Асылыкүлдең өҫтө генә түгел, аҫты ла үҙе бер мөғжизәләр донъяһы. Сөнки Заятүләктең һөйгәне Һыуһылыу - нәҡ ошо күл төбөндәге һыу аҫты батшаһының ҡыҙы ла баһа. Унда Һыуһылыуҙың үҙенең "аҡ быяланан һарайы бар ине". "Һарайҙың диуары быяланан, баштары йәүһәрҙән, иҙәндәре мәрмәр ташынан ине..." Эйе, бөйөк матурлыҡ донъяһы ижад иткән бороңғо һүҙ оҫтаһы. Рус халҡының "Садко" эпосы менән сағыштырып ҡараһаң, унда һыу аҫты батшалығы Илмән күле төбөндә, башҡорттоң был фантазия донъяһы Асылыкүл менән бәйле булыуы йәһәтенән гәйәт ҡыҙыҡлы.

Әйтергә кәрәк, эпос үҙе һәм уның геройҙары хәҙер ҙә Асылыкүл буйы башҡорттарының күңел түрендә урын алған. Заятүләктең күл буйына килеп туҡтаған һәм аты бәйле торған урынды ла, Һыуһылыуҙың, күл өҫтөнә сығып, сәс тарап ултыра торған ташты ла улар ысын итеп белә, ҡәҙерләй.

Һәм бына мин татлы хыялға бирелеп китергә лә әҙермен: эпос йөкмәткеһенә бәйле ваҡиғалар, эпос геройҙарының портреттары нәҡ бына күлдең ошо төшлөк яғындағы яр буйҙарын биҙәп, скульптуралар ҡуйып, ысынлап та тарихи-мәҙәни экспозиция тыуҙырыуға хаҡлы ла баһа. Күҙ алдына килтерәм: Һыуһылыуҙың сәс тараған ташында, айлы төндә күҙҙең яуын алып, башҡорт сибәре Һыуһылыу ултыра, ә ана Ҡарағас тауының башында уға ҡарап таң ҡалған һәм ғашиҡ булған Заятүләк тора. Ҡашҡа тауҙағы яңғыҙ бер ағас төбөнә уның аты бәйләнгән, Балҡантауҙа иһә Заятүләк менән Һыуһылыу ҡәбере өҫтөнә һәйкәл ҡуйылған, ти. Бындай рухиәт комплексы ысынлап та Асылыкүлдең тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыһы булараҡ әһәмиәтен бермә-бер күтәрер, рухи байлыҡтарыбыҙҙы бик һәйбәт итеп пропагандалау сараһына әйләнер ине. Бәлки, йәш рәссамдар, скульпторҙар араһында бороңғо башҡорт эпосы менән илһамланып эшкә тотонорҙай ижадсылар табылыр ҙа әле. Ул ваҡытта инде күлдең тирә-яғындағы тәбиғәтте, геологик ҡомартҡыларҙы, бик һирәк үҫемлектәрҙе һәм йәнлектәрҙе һаҡлау мәсьәләһенә лә еңеллек килер ине. Хәҙергә иһә, күл тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, ял итеүселәр ҙә, урындағы халыҡ һәм хужалыҡтар ҙа был ҡомартҡыны һаҡлауҙа илтифатһыҙлыҡ күрһәтә. Күлдең таҙа һыуы, балығы, бындағы климат бигерәк тә йәй көндәрендә бик күп кешеләрҙе ылыҡтыра. Пионер лагерҙары, ял итеү базалары саманан тыш күбәйгән бара. Был күл буйында, шул уҡ төшлөктәге тау араларында, бик бороңғо дәүерҙәрҙән ҡалған таш ҡомартҡылар ҙа һаҡланған. Яҙыусы Йыһат Солтанов уларҙы башҡорттарҙың ата-бабаларының ритуал урындары тип иҫәпләй. "Аҫа-Аба" тигән һүҙ - быныһы инде ошондағы таш плиталағы дүрт юллыҡ яҙманың өсөнсө юлы. Ерле башҡорттар элек-электән үҙҙәрен аҫаба тип атай. Был һүҙ әүәлге Зороастрий динендәге айығыр-алла исеме "Асва" йәки "Асуа" менән тап килә. Яҙма ла, ҡорбан килтереү таштары ла шул дәүерҙәрҙән ҡалған, тип фараз итә тикшереүсе. Был хаҡта "Советская Россия" гәзите яҙып сыҡты (16.08.1985).

Асылыкүлдең тәбиғәте лә, ошо ерҙә тыуған илһамлы шиғрият тә киләсәк быуындарға үҙҙәренең матурлығы, күркәмлеге менән барып етергә тейеш.

Рәшит ШӘКҮР.

✓ *Ҡөрьәндән бер аят йәки хәҙис ятларға ауырһынып та, һүҙҙәре бер ниндәй мәғәнә лә бирмәгән популяр йырҙар бер ниндәй ауырлыҡһыҙ иҫебеҙҙә ҡала һәм йырлана. Ошо үҙе парадокс түгелме ни?*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# "МОНГОЛ ТҮГЕЛБЕҘ, ТИП,

## көрәшкә сығам һәм еңеремде беләм..."

**"Ватандаш" журналында тарихсылар, фольклорсылар, уҡытыусылар, талиптар, мәктәп уҡыусылары өсөн аҫыл сығанаҡ, табыш, өр-яңы мәғлүмәт булыр мәҡәләләр әленән-әле баҫылып тора. Улар рухи мираҫыбыҙҙы тағы ла тулыландыра һәм байыта. Журналдың даими авторҙарының береһе Спартак Ильясов үҙенең тарихнамәләрендә иҫ китмәле бай мәғлүмәттәргә эйә һәм быға саҡлы иғтибар ителмәгән хәл-ваҡиғаларҙы сағылдыра. Әйтәйек, ул барын-табындар ерендә сыҡҡан йырҙарҙы риүәйәттәре, аңлатмалары менән яҙып сығарҙы. Уның "Маянһылыу әруахы", "Олатайҙар тотҡан ҡоралдар" кеүек яҙмалары фольклорсыларҙа, тарихсыларҙа, уҡытыусыларҙа ғәйәт ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.**

Спартак Мөжәүир улының инаныуынса, һәр кем үҙенең кем икәнлеген белергә бурыслы. Тарихи тамырҙарың ҡайһы олонға барып тоташыуын белеү өсөн аҙмы-күпме шәжәрәңде белергә тейешһең. Әгәр ҙә һин үҙеңдең тамырҙарыңды белһәң, ереңә, илеңә ҡарата һөйөүең артыр һәм үҙеңде шул ерҙең хужаһы итеп нығыраҡ тоясаҡһың. Был ергә мин хужа, беҙ хужа тигән дөйөм тойғо тыуыр. Дөйөм тойғо иһә дөйөм олонға тоташтырыр. Ә олонроң бөтә тамырҙары менән тыуған ереңә ереккән.

Быуындан-быуынға бирелгән яҙма ҡомартҡылар даулы замандарҙа юҡҡа сыҡҡан, әммә бәғзе бер күсермә шәжәрәләр беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Көнсығыш табындар тарихына бәйләләре Спартак Мөжәүир улы ҡулына ла килеп эләккән. Улар тәү тапҡыр "Үҙ тарихым асылы" тигән баш аҫтында "Ватандаш" журналының 6-сы, 7-се һандарында донъя күрәсәк. Әле һөйөнсөләп, ошо күләмле мәҡәләнең бер генә битенә күҙ һалайыҡ.

"Ырыуҙарҙың этник сығышын билдәләгәндә шәжәрәләр төп таныҡлыҡ булып тора,- тип яҙа Спартак ағай Ильясов.- Бөгөнгө көндә булған барлыҡ фамилияларҙың тамыр-тармағын байҡау мөмкин дә түгелдер. Әммә төп олоно, ҙур ботаҡтары булыуы үҙе бөтөн ырыуҙың шәжәрәһе тигән һүҙ. Оло ботаҡтарҙың айырсаларын, япраҡтарын ҡайһы ергә бәйләү һәр аймаҡтың үҙ бурысы. Тарихсылар, Барын ырыуының төп сығышы -монголдар, тип күптәнән фәнни фекер нығытып ҡуйған инде. Әммә беҙ, үҙебеҙ, барындар, быяың менән һис килешә алмайбыҙ. Өндәшмәй генә килешер инек, әгәр күсермә булһа ла төп шәжәрә олоно булмаһа. Ул бар. Ул беҙҙең ҡулда. Шуның өсөн дә монгол түгеллегебеҙҙе раҫлап, ғарыҡлауҙарҙы төҙәтер өсөн шул ҡулъяҙманы билғау итеп тотоп, майҙанға көрәшергә сығам. Белеп торам еңәсәгемде. Киреһен раҫлар өсөн һеҙгә Ҡытай, Уйғыр, Монгол, Төрөк, Ҡырым, Ҡырғыҙ, Ҡаҙаҡ илдәре архивтарын ҡутарыу кәрәк. Ҡутарһағыҙ ҙа дәлилегеҙ тап килмәҫ. Сөнки Сәхәүетдин мулла, Ҡужахмәт хужа, Исхаҡ һәм Ғосман мулла варисҭарына аманат ҡалдырған. Барын - табындарҙың был шәжәрә башын Сәхәүетдин мулла васыят иткән. Әлбиттә, уға уның боронғо ата-олаталары мираҫ иткән.




Миндә һаҡланған ошо шәжәрә күсермәһе Сәхәүетдиндең улы Яппархажи тарафынан һаҡлана. Яппархажи 1930 йылда раскулачивать ителгәс, яҙмаларын үҙе менән алыу мөмкинлеген таба. Үҙе Кемерово өлкәһендә шахта эштәрендә үлеп ҡала. Ҡулъяҙманы Арғаяш районы кешеһенә биреп ҡайтара. Ҡулъяҙма-аманат Силәбе өлкәһе Уй районы Булат ауылында тормошта булған Зөһрә исемле ҡыҙына килеп эләгә. Зөһрә - инәйемдең атаһы, Сәлимгәрәйҙең бер туған һеңлеһе.

Академик Кузеевтың ҡулында беҙ килтергән шәжәрә булмаған. Унда тик көнбайышта йәшәгән ҡара табындарҙың һәм Ағиҙел буйында йәшәгән йомран-табындарҙың шәжәрәләре бар. Йомран-табындарҙың шәжәрәһендәге кеше исемдәрен районыбыҙ тарихы менән бәйләмәйем, әммә ундағы Һөйөндөк, Ҡунаҡбай, Юлдаш, Атаяҡ, Ҡәйепҡол, Ҡолош исемдәре, нисектер, күңелде һағайта. Ҡара табындарҙың шәжәрәһенән айырмалы рәүештә, Сәхәүетдин мулланан ҡалған яҙма буйынса барындар үҙҙәренең төп ҡартатаһы тип туранан-тура Табын ҡағанды күрһәтә.

Табындан һуң Томан ҡаған - Томанлы йәки Томансы. Ҡәүем башы Табындың башҡа улдары күрһәтелмәй. Томанлы - Томансы бөгөнгө Төмән (Тюмень) ҡалаһы ерен күрһәтә. Быны ла инкар итеп булмаҫ.

Айырмалыҡтың тағы ла бер ере бар. Унда Табын да, Томан да ҡаған тип күрһәтелә. Майҡы бей ҡаған түгел. Тарих фәндәре докторы мәрхүм Рим Янғужин Майҡы бейҙе Сыңғыҙхан ғәскәренең бер өлөшөнөң етәксеһе тип яҙа. Мөхәммәтғәли Кейеков табындарҙы Иртыш буйынан күсенеп килгән тип билдәләй шәжәрәлә.

Табын-барындарҙың Туңғатар ауылы кешеһе Мырҙахан хәлфәнән мираҫ булып ҡалған шәжәрәһе. Сәхәүетдин Ҡорамшин мулланыҡынан аҙ ғына айырмалы. Ҡарамышев Мырҙахан Турғайҙың улдарын Ҡәмбәр, Күкәм, Тәңребирҙе итеп күрһәтә.

Ә Сәхәүетдин мулла Турғайҙың Хужабирҙе, Хупбирҙе (игеҙәктәр), Иҫәнбәт (быныһы икенсе инәйҙән) һәм Кембирҙе тигән дүрт улын күрһәтә. Хужабирҙенең балалары күрһәтелмәй. Хупбирҙенән дүрт ул: Тәңребирҙе, Дуҫбирҙе, ике изге ул Кискилде һәм Ҡушкилде. Сәхәүетдин мулла һәм унан һуңғылар тик үҙ тармағын ғына күсергәнгә оҡшай. Һис шикһеҙ, был шәжәрә бик киң булғандыр. Артабан төп ҡарттай Буғай солтан күренә. Әммә кемдең улы булыуы аңлайышһыҙ. Кискилде улымы, әллә Ҡушкилденекеме? Буғайға ул аңлатма биреп китә.

Буғайҙың инәһе яуҙан урлап алып ҡайтылған була. Оҙаҡ бала күрә алмай йөрөй. Балаға ҡалһа, ат менә лә саба икән. "Ҡыһыр" тигән ҡушамат та биргәндәр икән үҙенә. Йәше бер арғымаҡ ғүмеренә тиңләшкәндә генә Буғайҙы тапҡан, имеш. Улына исемде лә үҙе ҡушҡан, ти. Буғай хакимдың өс улы һәм ике ҡатыны күрһәтелә. Оло ҡатынынан - бер ул. Ҡаҙаҡтарҙан килтерелгән Юлдус Айшан һәм Тайшанды Буғайға бүләк иткән. Мырҙахан хәлфәнең күсермәһендә Айшан менән Тайшандың нәҫел-нәсәбе яҙылмағанлыҡтан, беҙ уларҙың бер өлөшөн бирәйек, сөнки бөтә халыҡтың тамырын яҙып бөтөрөү мөмкин түгел, кем үҙ тамырын нисек яҙған, шул килеш бирергә тырышайыҡ. Башта Тайшан тамырын асып ҡарайыҡ.

Буғай хакимдың күбәләктәрҙән алған Аҡсискә (Аҡсәскә) исемле ҡатынынан бер генә ул - Йомакилде күрһәтелә. Йомакилде көнбайыштан Урал аша үтергә тырышҡан урыҫ воеводалары менән Ләмәҙтамаҡ тирәләрендәге һуғышта ҡаты яра алып ҡайтып, үҙ йәйләүендә, үҙ тирмәһендә йән бирә. Ҡәбере Ураҙ ауылы ҡаршыһындағы Айынташ йәйләүендә, йә Яйыҡтың уң ярындағы ултырағында, хәҙерге Учалы - Белорет юлы өҫтөндәге Батшалыҡ түбәһендә булырға тейеш. Шулай һөйләй торғандар ине ҡарттар, ҡәртнәйҙәр. Сөнки ул ерҙәр, Тәңребирҙе буйында ойошторолған биш ырыу ҡоролтайы ҡарары менән ҡара табындарға бирелгәнсе, Барын-Табын ерҙәре була.

Йомакилденең туғыҙ улы күрһәтелә. Оло улы - Талыш. Ул ер хәҙер Талышман тип атала. Талыш атаһының ере - Батшалыҡ түбәһенә ҡаршы бик матур шишмәле тау бөгәжәһе. Ултыраҡ йәшәргә бик уңайлы урын. Әлегә тиклем унда колхоздың ялан батырҙарының төйәге булды. Талыш ҡалмаҡтар менән һуғышта үлә. Ғәҙәттә, көнсығыштан, йә көньяҡтан килгән дошман, был юлы төньяҡтан аңғартмаҫтан килеп баҫа. Ҡырҡасты урманының көнсығышында, аҙағыраҡ Кәтерин юлы үткән ерҙә, ялан-ағаслыҡ араһында була сапҡыслашыу, сәнсешеү. Ҡалмаҡтар күп булып, еңеүгә өлгәшә. Хәҙер ул ерҙе Яулығас тиҙәр. Дөрөҫ, исеме - Яулы ағас. Йомакилденең Өмәрҡүл исемле улының Яйыҡ тигән улы була, әммә уның улы Ҡотлогилденән башҡа эҙҙәре яҙыуҙа юҡ.

Тайшандың, күбәләктәрҙән алған Тәңкәле исемле бик матур ҡатынынан биш ул тыуа: Аят, Сапҡын, Бороҡ, Ҡужай, Ҡолаҡсын. Әммә Ҡужай тигәне йә иртә үлгәндер, йә башҡа бер сәбәбе булғандыр. Сөнки уның исеме өҙөк-һурыҡ һыҙыҡ менән генә уратылған. Исеме билдәле булмаған тағы бер ҡатынынан Аят һәм Ҡолаҡсын тыуа. Малайҙарҙың исеменә ҡарағанда улар ҡаҙаҡтарҙан йә урлап, йә баҫып алған ҡатындан тыуғандыр кеүек".

"Үҙ тарихыбыҙ асылы" тарихнамәһендә Буғай хакимдың улы Айшан һәм уның балаларын таныҡҡан шәжәрә һәм башҡа шәжәрәләр, тарихи сығанаҡтар, белешмәләр ҙә ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле. Материалдың тулы вариантын "Ватандаш" журналында уҡый алаһығыҙ.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҒӘҘӘТТӘР ТУРАҺЫНДА УЙЛАН

**Аптырарһың...**

Кеше күп осраҡта хатта мохтаж булған туғанына йәки ниндәйҙер изге эш өсөн саҙаҡа итеп йөҙ һум бирергә ауырһына, әммә ҡиммәтле рестарандарҙа меңәр һум аҡсаһын сығарып һалырға йәлләмәй.

**Парадокс...**

Кеше йөрәген уятыусы, үҙенә нур биреүсе Аллаһы Тәғәләгә доғаға ун минут ваҡытын ҙур ауырлыҡ менән бүлә, ә бының урынына ул сәғәттәр буйына арығансы гәзит, журналдар уҡырға, радио, телевидениенан файҙаһыҙ тапшырыуҙар ҡарап ултырырға әҙер.

**Парадокс...**

Сәғәттәр буйы футбол матчы ҡарап, донъя чемпионатының һөҙөмтәләрен тикшереп һөйләшеүҙәр бөтә эш көнөнә һуҙылыуы мөмкин, ә ашығыс эштәр көтә, ваҡыт юҡ, тип һылтанып, ғалимдың файҙалы вәғәзен йәки йома хөтбәһен аҙаҡҡа тиклем тыңларға ваҡытыбыҙ юҡ.

Кеше уңайлы булһын өсөн театрҙарҙа билеттарҙы беренсе урындарға алырға тырыша, ләкин мәсеттәрҙә йәмәғәт намаҙын уҡығанда бер ҙә генә беренсе рәткә торорға ашыҡмай. Ҡайһы саҡта тиҙерәк сығып китеү мөмкинлеге булһын өсөн юрамал артҡы урындарҙы ала.

**Парадокс...**

Кешенең үҙ файҙаһы өсөн әллә ниндәй уйҙырмаларға, хатта насар ғәйбәткә барып етеүе ихтимал, әммә хаҡлығында бер ниндәй шик булмаған ябай һәм аңлайышлы нәмәләрҙе аңламауы мөмкин.

Күп осраҡта кеше Ҡөрьәндән бер аят ятлар йәки ниндәйҙер сүрәне уҡып, уны тәфсирләр өсөн ваҡыт бүлергә ауырһына, ә ниндәйҙер бер файҙаһы булмаған романды иҫе китеп уҡый.

Ҡөрьәндән бер аят йәки хәҙис ятларға ауырһынып та, һүҙҙәре бер ниндәй мәғәнә лә бирмәгән популяр йырҙар бер ниндәй ауырлыҡһыҙ иҫебеҙҙә ҡала һәм йырлана. Ошо үҙе парадокс түгелме ни?

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кеше бер нәмә лә эшләмәйенсә генә ожмахҡа инергә теләй.

**Аптырарһың...**

Кеше көн һайын үлем тураһында ишетә, уның менән күҙгә-күҙ осраша, шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҙе лә бер көн үлере тураһында уйламай.

**Аптырарһың...**

Кеше үҙенең тиреһен матурлай, тәнен, һынын ҡарай, ашаған аҙығын тикшерә, ләкин күңелен матурлар, рухын байытыр өсөн бер нәмә лә эшләмәй.

✓ ***Башҡорт тырыш, талантлы, үҙенә кәрәкһә, эшсән халыҡ. Башҡортостандан ситкәрәк сыҡһаң, беҙҙең егеттәр һәр йәһәттән дә алғыр. Ә ни өсөн закон йәһәтенән нығыраҡ яҡланған үҙ республикаһында милләттәштәребеҙ бындай сифаттарға эйә түгел һуң?***



# Милләтем, бына мин

**Һуңғы ваҡытта күп кенә шәхестәребеҙ дингә ҡайта башланы. Әлбиттә, был етди аҙым һәм уның төрлө сәбәптәре бар. Кемдер берәү сиргә дусар булғандан һуң, икенсеһе ҙур ҡайғы кисергәс, өсөнсөһө үҙ белдеге менән аңлы рәүештә ошо юлға баҫа. Нисек кенә булмаһын, күңелдә Аллаһы Тәғәлә исеме менән нағышларға теләүселәрҙең бындай тәүәккәл аҙымын хупларға һәм ҡыуанырға ғына ҡала. Элек тә халкыбыҙҙың рухи юлбашсылары барыһы ла дини кеше булған. Салауат Юлаев, Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек шәхестәребеҙҙең дини рух менән милли рухты бергә ҡуша алыуҙары милләтебеҙ йәшәйешенә яңы һулыш өргәнен бик яҡшы беләбеҙ. Хәҙерге заманда милли хәрәкәтебеҙҙең башта ялҡынлы усаҡ кеүек дөрләп, аҙаҡ базыкланып ҡалыуының сәбәбе дини рух менән милли рухтың айырылыуында түгелме икән, тип тә уйлап ҡуябыҙ хатта. Әле һеҙҙең иғтибарға тәҡдим иткән әңгәмәлә ике абруйлы ир-уҙаман ҡатнаша. Улар: Мәләүез районының "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире Сәйфулла ӘМИРОВ менән шағир, Башҡортостан һәм Рәсәй яҙыусылар союзы ағзаһы Тимер НИӘТШИН. Уларҙың әңгәмәһе нәҡ ошо милли һәм дини рух тураһында. Һүҙ - уларға.**

**▸ Ауылдар буйлап йөрөгән саҡта гәжәйеп бер күренеш менән осрашырға тура килгәне бар. Үҙебеҙҙең милләт вәкилдәре йәшәгән ауыл урамдарына барып инеүең була, ултырған арбаң йә машинаң яндауынан эттәр өрә-өрә сабырға тотона. Маҡсаттары - сит кешене ауылға индермәү. Әллә, тием, эттәр ҙә һиҙенәме икән был ауылда йәшәүселәрҙең аҫаба икәндәрен?**

**Т. НИӘТШИН:** Эт өргәс, был ауылда хужа бар, тормош бара, тигән һүҙ. Хужа булғас, ниндәйҙер тәртип бар. Ташландыҡ ауылдың эттәре өрмәй бит, сөнки ул ауылдың һаҡларлыҡ байлығы юҡ. Шуға күрә ауылдарыбыҙҙа эттәребеҙ өрә икән, шөкөр итәйек.

**С. ӘМИРОВ:** Беҙҙең халыҡ һуңғы ваҡытта үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тоя башланы. Быға тиклем был тойғо уның күңеленең иң төбөнә йәшеренгәйне. Ваҡыт үткән һайын, ватансылыҡ тойғоһо беҙҙең халыҡта көсәйә бара. Беҙ үҙ ерегә нығыраҡ баҫып атлап йөрөй башланыҡ. Шул уҡ ваҡытта еребеҙҙә йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре лә беҙҙең был тойғобоҙ менән иҫәпләшергә мәжбүр. Беҙ быны күбебеҙ һиҙмәйбеҙ, ә бына хужаһына тоғро булған эт һиҙә. Һуңғы йылдарҙа XX быуатта һәм унан алда ла төрлө кампаниялар һөҙөмтәһендә беҙҙең ерҙәрҙә барлыҡҡа килгән рус ауылдары юҡҡа сыҡты. Был ер тойғоһона бәйле. Мин үҙебеҙҙең Йомағужа ауылынан ғына сығып әйтәм. Беҙҙең ауылда һуңғы 15 йыл эсендә генә 20-нән артыҡ йорт төҙөлдө. Колхоз-совхоз бөттө, тип, берәү ҙә иламай, киреһенсә, ергә йәбешеп яталар. Беҙҙең 48 йортлоҡ ҡына ауылда 9 шәхси трактор бар. Бүре - беҙҙең тотем һәм беҙ ҡаныбыҙҙың төпкөлөндә ятҡан ошо бүрелегебеҙҙе тоймайбыҙҙыр ҙа, ә бына тоғро этебеҙ быны һиҙә.

**Т. НИӘТШИН:** Әлбиттә, этен-эте үҙенең башҡорт ерендә йәшәгәнлеген тойоп, беҙгә белдертә икән, беҙ быға шатланырға ғына тейешбеҙ.

**▸ Донъябыҙ ҡапыл үҙгәрҙе, полюстар, этик нормалар алмашынды һәм беҙ күп йәһәттән яңыса йәшәү рәүешенә әҙер булмай сыҡтыҡ. Күберәк тарихҡа ҡарап йәшәйбеҙ. Бына шул турала нисек уйлайһығыҙ?**

**Т. НИӘТШИН:** XXI быуат милләт, дәүләт, кешелек алдында әллә ниндәй көтөлмәгән һынауҙар ҡуйҙы. Башҡорт ниндәйҙер идея тирәһендә ойошоп йәшәһә лә, байлыҡ йыйыу, капитал туплау өлкәһендә берләшә алмай. Шулай уҡ дәүләттең байлығын файҙаланыу сифаты ла юҡ беҙҙең милләттә. "Үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын", тип йәшәйбеҙ барыбер ҙә. Мин был турала оҙаҡ уйланып, шундайын фекерҙәргә килгәнем бар: бында беҙҙең аҫабалыҡ та кире роль уйнамай ҡалмайҙыр. Дөрөҫ, беҙ артҡа, йәғни тарихыбыҙға ҡарап, алға барыу өсөн көс алабыҙ. Бер туҡтауһыҙ еребеҙ өсөн барған ихтилалдарҙы, уларҙың нисек ҡанға батырылыуын иҫкә алабыҙ. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгә тиклем ҡанында һәм аңында аҫабалығын һаҡлап ҡалған милләт мандып китә алмай. Мин үҫмер сағымда ҡарттарҙан "Батша ваҡытында йәшәү рәхәт инеме, әллә совет осорондамы?" тип һорай торғайным. Улар: "Әлбиттә, батша ваҡытында, сөнки беҙ үҙ еребеҙҙе ҡуртымға алған урыҫтарҙан он, картуф, йәшелсә барып ала торғайныҡ", - тип яуап ҡайтара ине. Бер кемгә лә сер түгел, ерҙәребеҙ иркен булғас, атай-олатайҙарыбыҙ ул ерҙәрҙе башҡаларға ҡуртымға биреп тә, һатып та көн иткән. Һәм ошо аҫабалыҡ беҙҙе вайымһыҙлыҡҡа һәм ялҡаулыҡҡа өйрәткән дә инде. Башҡорт XXI быуатта үҙенең тыуған ерендә, тыуған ауылында көслө милләт булып йәшәһен тиһәк, башҡорттар йәшәгән ауылдарҙы предприятиеларҙан шефҡа алдыртып, көҙөтле агрохолдингтар төҙөп ҡалырға кәрәк буласаҡ. Фермер хужалығы киләсәгебеҙҙең нигеҙен тәшкил итә алмаясаҡ. Һуңға ҡалмаһаҡ әле. Рәсәйҙең милли проект нигеҙендә бүлгән аҡсаларын үҙебеҙҙең милләткә хеҙмәт иттерә лә белергә тейешбеҙ. Ул аҡсалар, мәҫәлән, Мәләүездә - күркәгә, Көйөргәҙелә француз һыйырына китте. Беҙ үҙ еребеҙҙәге аҡсаны үҙебеҙ тапап йөрөйбөҙ, тик шуны күтәреп кенә ала белмәйбеҙ. Себергә китеп, аҡса эҙләп ҡарайбыҙ, унда ла алдашыу китте. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең тыуған еребеҙҙәге аҡсаларҙы башҡалар үҙләштерә.



**С. ӘМИРОВ:** Мин икенсерәк уйлайым. Советтар Союзы тарҡалып, һәр кем юрғанды үҙенә тарта башлағас, миндә бер ҡурҡыу тойғоһо тыуғайны. Рәсәйҙә, Америкалағы һымаҡ, "кеше кешегә бүре" тигән принцип өҫкә сыҡмаҫмы, тип борсолдом. Был шигем хәҙер таралды. Бөгөн, шул ваҡытҡа егерме йыл үткәс, милләтебеҙҙең бер бөтөн икәнлеген дәлилләгән күп кенә күрһәткестәр бар. Юғалып ҡалманыҡ. Икенсеән, милләт теге йәки был ситуацияла шулай булырға тейеш, тип уны алдан әҙерләп булмайҙыр ул.

***Беҙ бер-беребеҙгә һәм үҙебеҙҙә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә ҡараш, мөнәсәбәт буйынса бөгөн Европаның Швеция, Швейцария, Финляндия кеүек илдәр менән типә-тиңбеҙ. Эйе, беҙҙә сауҙагәргә хас өҙгөслөк, йолҡҡослоҡ, кеше алдау сифаттары юҡ, уның ҡарауы, беҙ башҡаларға оло сабырлыҡ менән ҡарай беләбеҙ. Мин хәҙерге йәштәребеҙгә һөҡланып бөтә алмайым. Беҙ кредитҡа ун мең һум аҡса алырға ла баҙнатсылыҡ итмәгән быуын вәкилдәре. Ә бына беҙҙең балалар был йәһәттән бик тәүәккәл. Ҙур суммала кредит алырға баҙнатсылыҡ иткән кеше - ул киләсәгенә, тимәк, үҙ көсөнә ышаныусы кеше. Йәштәрҙә хәҙер ҡурҡыу тойғоһо юҡ һәм был сифат бик ҙур әһәмиәткә эйә. Милләт ошо юлды үтергә тейеш.***

Дөрөҫөн әйткәндә, Америка йөҙ йылда үткән юлды беҙ ун йылда үтеүгә өлгәштек. Милләтебеҙҙең үҙгәрештәргә, баҙар иҡтисадына әҙер булмауының ике яғы бар. Беҙ бер-беребеҙгә һәм үҙебеҙҙә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә ҡараш, мөнәсәбәт буйынса бөгөн Европаның Швеция, Швейцария, Финляндия кеүек илдәр менән типә-тиңбеҙ. Эйе, беҙҙә сауҙагәргә хас өҙгөслөк, йолҡҡослоҡ, кеше алдау сифаттары юҡ, уның ҡарауы, беҙ башҡаларға оло сабырлыҡ менән ҡарай беләбеҙ.

Мин хәҙерге йәштәребеҙгә һөҡланып бөтә алмайым. Беҙ кредитҡа ун мең һум аҡса алырға ла баҙнатсылыҡ итмәгән быуын вәкилдәре. Ә бына беҙҙең балалар был йәһәттән бик тәүәккәл. Ҙур суммала кредит алырға баҙнатсылыҡ иткән кеше - ул киләсәгенә, тимәк, үҙ көсөнә ышаныусы кеше. Йәштәрҙә хәҙер ҡурҡыу тойғоһо юҡ һәм был сифат бик ҙур әһәмиәткә эйә. Милләт ошо юлды үтергә тейеш.

Аллаға шөкөр, ошондай ҡатмарлы трансформация ваҡытында милләтебеҙ үҙенең йөҙөн юғалтмай сығып килә. Беҙ ошо йәштәребеҙ арҡаһында яңы баҫҡысҡа күтәрелдек. Ауылда колхоз-совхоздар һаҡланмағандан ғына, кемдер ер һөрөп сәсмәгәндән генә милләтебеҙ юғалып ҡалмаясаҡ. Дүрт мең йыл элек йәшәгән бер фәйләсуф йәштәргә ҡарап былай тигән: "Хәҙер шундай йәштәр китте. Улар ата-әсәһен тыңламай, тормошҡа еңел ҡарай, яраҡлаша белмәй.." Беҙҙең атайҙар ҙа беҙгә шулай тигәйне: "Бына беҙ үлгәс, һеҙ тормошто алып китә алмаясаҡһығыҙ..." Миненсә, беҙ милләт өсөн юҡҡа борсолабыҙ. Әхмәтзәки Вәлиди "беҙ - аҡтамыр кисәге" тип әйткән бит. Миненсә, беҙҙең милләт баҙар иҡтисадына, бүтән милләттәрҙән айырмалы, үҙенең кешелек йөҙөн һаҡлап инеп килә.

**Т. НИӘТШИН:** Сәйфулла, Мәләүез урамында һин дә йөрөйһөң, мин дә йөрөйөм. Беҙҙең иң үҙәк урам - Ленин урамы. Шул урамда ҡул һоноп, хәйер һорашып ултырыусыларҙың нисә проценты беҙҙең милләт кешеһе, һин беләһеңме шуны? Беҙ толерантлыҡ буйынса, әлбиттә, Европа илдәрен ҡыуып еттек - яҡшы. Әммә йәшәү кимәле буйынса беҙҙекеләрҙеке иң түбәне түгелме һуң? Әлбиттә, власть тирәһендәге "ялғашка" эләккән милләттәштәребеҙ яҡшы йәшәп алып китте, тик беҙҙең милләттең хәле системалы рәүештә яҡшырманы бит. Әлбиттә, башҡорт тырыш, талантлы, үҙенә кәрәкһә, шул тиклем эшсән халыҡ. Күҙәтеп йөрөйөм: Башҡортостандан саҡ ҡына ситкәрәк сыҡһаң, беҙҙең егеттәр һәр йәһәттән дә алғыр, улар мал таба белә, ойоштороу һәләтенә лә эйә, алыпһатарлыҡ та уның ҡулынан килә. Ә ни өсөн закон йәһәтенән нығыраҡ яҡланған үҙ республикаһында милләттәштәребеҙ бындай сифаттарға эйә түгел һуң? Бына мин шуға яуап таба алмайым.

**С. ӘМИРОВ:** Ситтә беҙҙекеләрҙең көслө булыуына тағы бер миҫал, мәҫәлән, Абхазияла барлыҡ курорт-санаторийҙар беҙҙең егеттәр ҡулында.

**▸ Беҙ "Киске Өфө" гәзите редакцияһы менән Бөрйән районындағы ҡурсаулыҡҡа барғанда унда эшләүселәр гәжәйеп бер күренеш һөйләгәйне. Һунарсылар баҫтырып килгән боландар һәм ҡоралайҙар ҡурсаулыҡ сигенә килеп инеү менән артынан ҡыуғандарҙан ҡурҡмайынса, туҡтап ҡалалар ҙа, уларға боролоп баҫып, тегеләрҙе үсекләйҙәр икән. Йәнәһе, аттығыҙ атмай ҙа беҙгә, беҙҙе хәҙер был урында закон һаҡлай. Ысынлап та, һунарсыларҙың ниндәй генә лицензияһы булмаһын, ҡурсаулыҡ эсендә һәр бер йәнлек, һәр бер ағас һәм үлән, сәскә закон һаҡлауы аҫтында. Тимерйән ағай, һеҙҙең, ситтә йәшәүсе беҙҙең егеттәр алғыр, тип әйтеүегеҙҙе, бәлки, ошо ҡурсаулыҡ миҫалы менән дә сағыштырып булалыр? Закон яҡлағанды хатта мал да һиҙә, бағы өрөүсе эт феномены ла ошоға оҡшаш…**

**Т. НИӘТШИН:** Болан өсөн закон тарафынан һаҡланыу зонаһы ул ҡурсаулыҡ. Ә кешелек өсөн бындай ҡурсаулыҡтарҙың исеме резервация тип атала. Хәҙерге интеграция шарттарында беҙ башҡаларҙан айырылып, үҙебеҙ айырым ғына йәшәй алмайбыҙ. Милли аңыбыҙ уянып бөтмәгән әле. Донъяла аяғөҫтә йоҡлап йөрөгән кешенән дә мәғәнәһеҙерәк кеше юҡ. Уятыуҙың да төрлө юлдары бар. Миңә ҡайһы берәүҙәр: "Тимерйән, һин ни өсөн үҙ халҡыңды бер туҡтауһыҙ маҡтайһың да маҡтайһың ул?" - тиҙәр. Мин уларға: "Кем үҙ балаһын типкеләп уятһын инде?" - тип яуап бирәм. Ысынлап та, кеше үҙенең кемлеген белһен, ғорурланһын өсөн уны атай-олатайҙарының данлы үткәне менән маҡтарға кәрәк. Донъя ысынбарлығы былай ҙа беҙҙең милләтте типкеләп уятырға, күңеленә ҡурҡыу тойғоһо һалырға итә. Беҙ иһә, үҙебеҙҙе теге йәки был кимәлдә интеллигент тип белеүселәр, милләтебеҙҙе уятыуҙың нәҡ хуплау һәм маҡтау формаларын һайларға тейешбеҙҙер. Сәмгә тейеп тә була бит маҡтау юлы менән. Әйтәйек, "Һинең ата-олатайҙарың бына шундай булған, ә һин?.." тигән һорау ҡуйырға була.

**С. ӘМИРОВ:** Ҡурсаулыҡ - закон тигән һүҙ. Әгәр ҙә кеше үҙ-үҙен яҡлай алмай икән, уны бер ниндәй закон да, ҡурсаулыҡ та, резервация ла яҡлай ҙа, һаҡлай ҙа алмаясаҡ. Икенсенән, закондың да бит шул уҡ кешеләр яҙа. Беҙгә милләтебеҙҙең үҫешен гарантиялай торған закондар ҙа кәрәк.

***✓ Бөгөн дин менән бизнес яһайҙар, диндең таҙалығы булған идеологияһы менән шөғөлләнеүсе юҡ. Әгәр ҙә дин Мөхәммәт бәйғәмбәргә нисек бирелгән, шулай тотолған булһа, бөгөн беҙҙең дингә дәүләт яғынан да, халыҡ яғынан да икенсерәк булыр ине, моғайын.***



# ЙӨРӘГЕҢДЕ АС, килдем…

**Т. НИӘТШИН:** Һуңғы ваҡытта дингә ынтылыш китте. Ошонда урынлы һорау ҙа тыуа: дин беҙҙе һаҡлай аламы? Бына һин, Сәйфулла, уттыһыуҙы кискәс, сәсең ағарғас, ғүмер тауындың башына менеп етеп барғанда дингә ҡайттың. Ғөмүмән, үткән быуаттың аҙағында милли хәрәкәттә йөрөгәндәр дингә ҡайта. Мин әле быға әҙер түгелмен, сөнки үҙемдең бихисап етешһеҙлектәремде беләм. Милләтте уятыуҙың, уға яңы һулыш биреүҙең боронғоса радикаль юлдары ла бар.

**С. ӘМИРОВ:** Ул һынауҙарҙы үттек бит инде, бер Ҡараһаҡал яуында ғына 60 мең милләттәшебеҙ ҡырылған. Был беҙҙең өсөн үтелгән этап. Беҙгә тарихтың, кешелектең дөйөм ҡанундары буйынса йәшәргә кәрәк. Беҙҙең Мәләүез мәҙрәсәһендә һәм мәсетендә һуңғы 4-5 йылда башҡорт тауышы күберәк ишетелә башланы. Шуныһы һөйөнөслө.

**▸ Беҙҙә милли кадрҙар мәсьәләһен дәүләт кимәлендә хәл итеү эше насар ҡуйылған. Беҙҙә генә түгел, дөйөм Рәсәй кимәлендә лә шул уҡ хәл. Ояты ни тора: губернаторҙар аварияларҙа йә вертолет менән ҡуян ҡыуалағанда һәләк була. Ғөмүмән, үҙ артынан эйәртер шәхестәр йөҙ йылға бер тыуа, тигәнгә ышанып та ҡуяһың.**

**Т. НИӘТШИН:** Милләткә шәхес кәрәк. Ниңә, боронғоса, батырҙар һәм әүлиәләр тыумай һуң беҙҙә? Әллә тыуғандары ла үҫтерелмәй ҡаламы? Иғтибар итмәйбеҙме уларға, әллә уларҙы таный белмәйбеҙме?

**С. ӘМИРОВ:** Аллаһы Тәғәлә беҙгә ундайҙарҙы әлегә бирмәй, сөнки беҙҙең милләт уларҙы ҡабул итергә әҙер түгел.

**▸ Философияла һандың сифатҡа күсеү законы бар. Бәлки, һеҙ күрергә теләгән шәхестәр милләтебеҙ 5-10 миллионға еткәс, тыуыр?**

**С. ӘМИРОВ:** Японддар бынан 100 йыл элек күпме булһа, бөгөн дә шул сама. Милләттең һанын бер ниндәй закон менән дә арттырып йә кәметеп булмайҙыр. Ул тәбиғи рәүештә артырға тейеш. Был процесҡа, йәғни Аллаһы Тәғәләнең ғәмәленә ҡыҫыла башлаһаң, артыҡ кешеләр барлыҡҡа килә.

**Т. НИӘТШИН:** Дини тәғлимәт, кешенең яҙмышы тулыһынса яҙылған, ти. Мао Цзэ Дун "Кеше аҡ ҡағыҙ, унда нимә теләһәң, шуны яҙып була", тигән. Кибернетика фәне, кешенең яҙмышы 50 проценты яҙылған, ҡалғанын кеше үҙе яҙа, тип иҫәпләй. Әгәр ҙә беҙ Аллаһы Тәғәлә милләтте теләһә - үҫтерә, теләмәһә - үҫтермәй, тип ултырһаҡ, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

**▸ Башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишан Рәсүлевтың XX быуат башында милләтебеҙҙе туплауҙағы әһәмиәтен һаман да баһалап бөтә алғаныбыҙ юҡ. Ул суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәтенә таянып, милләтебеҙҙең генетик һәм физик потенциалын бер йоҙроҡҡа туплауҙы ойоштора алған рухи юлбашсыбыҙ. Белеүебеҙсә, Әхмәтзәки Вәлиди был хәҡиҡәтте таныған һәм Зәйнулла ишанға юғары баһа биргән. Минеңсә, беҙҙең хәҙер йөрәгебеҙ йоҡлай, ә йөрәкте уятыуҙың юлы бит диндә һәм тәриҡәттә…**

**Т. НИӘТШИН:** Революцияны ерһеҙ, милекһеҙ халыҡтар яһаған, дөрөҫөн әйткәндә. Ә бына Зәйнулла ишан Рәсүлевтың халҡыбыҙ яҙмышындағы бындай әһәмиәте хаҡында мин тәүгә ишетәм. Мин был хаҡта белһәм дә, әһәмиәтен шундай кимәлдә баһаламағайным. Мин йыш ҡына 1917 йылғы менән 2007 йылғы башҡортто сағыштырам. 1917 йылғы башҡорт матди яҡтан хәлһеҙ булһа ла, рухи яҡтан шул хәтлем көслө булған. Беҙ бөгөн матди яҡтан 1917 йылғы башҡортҡа ҡарағанда хәллерәктер ҙә, әммә рухи яҡтан ҡайтышбыҙ. Сәбәбе бер генә: беҙҙе рухи көс биреп торған тарихыбыҙҙан айырҙылар. "Милләтем, йөрәгеңде ас, бына мин килдем", тигән кеше юҡ әлегә. Ундай лидер табылһа, тарихи хәтер, милли аң тиҙ уяна бит ул.

**С. ӘМИРОВ:** Йөрәкте уятыуҙың юлы суфыйсылыҡта ята. Традицион дин тотоусылар араһында йөрәктәре йоҡлаған ғәмһеҙҙәр булһа ла, суфыйҙар араһында ундайҙар булмаған. Беҙ әле бәләкәй саҡта "суфый" һүҙе кешене мыҫҡыллау, наҙанлыҡта ғәйепләү өсөн ҡулланылды. Ғәли Соҡорой, Шәмсетдин Зәкиҙәрҙең яҙмаларынан был хаҡта яҡшы беләбеҙ. Бая әйткәнебеҙсә, хәҙер милләтте күтәреүҙең төрлө ысулдарын ҡулланып ҡараған элекке милли хәрәкәт лидерҙары берәм-берәм дингә ҡайта башланы. Был да юҡҡа ғына түгел бит.

**▸ Беҙ хәҙерге заман цивилизацияһына аяҡ баҫһаҡ та, бер аяғыбыҙ менән барыбер ҙә милли булмышыбыҙҙа, икенсе төрлө итеп әйткәндә, тарихта ҡалырға тейешбеҙ. Ни генә тиһәк тә, үткән быуатта йәшәгәнде хәҙерге заман ысынбарлығы еңә алмай. XXI быуат прагматизмы XIX быуат романтизмы алдында барыбер көсһөҙ…**



**С. ӘМИРОВ:** Донъяның иң күп байлығын ҡулында тотҡан йәһүдтәр бөгөн Израилдә тыныс йоҡлай алмай, Европа, Америка байҙары аҙғынлыҡҡа бирелә. Тарих ҡабатланһа ла, тарихты үҙгәртеп булмай. Шул уҡ ваҡытта беҙ бөгөн милләтебеҙ өсөн бер нәмә лә эшләмәһәк, киләсәгебеҙҙе үҙ ҡулдарыбыҙ менән ҡырҡабыҙ.

**Т. НИӘТШИН:** Мин цивилизация барып етмәгән төпкөл ауылдарҙа булғаным бар. Унда үҙемә шундай һорауға яуап та эҙләп маташтым. Милләтте ниндәй этәргес көс һаҡлап килә һуң? Улар 30 сутыйлыҡ баҡсаларына 10 сутый ғына картуф сәсә, эргәләрендә бына тигән быуалары бар, әммә улар ҡаҙ тотмай, балыҡ үрсетмәй, өҫтәренә ағас ҡолап бара, үҙҙәре бәләкәй генә өйҙәрҙә йәшәй. Гүйә, улар 200 йыл элек нисек йәшәһә, бөгөн дә шулай йәшәгән һымаҡ килеп сыға. Бер йылдан артыҡ олигархтар көрсөк арҡаһында миллиардтарын юғалта, башҡорт, исмаһам, ҡымшанманы ла. Нисек йәшәгән, шулай йәшәп тик ята.

**▸ Кем белә, бәлки, ул шулай йәшәүе менән бәхетлелер?**

**Т. НИӘТШИН:** Бәхет шунда ғына микән? Ә бит дөрөҫөн әйткәндә, Европаның прагматизм юлы үҫештең дөрөҫ йүнәлеше түгел бит.

**С. ӘМИРОВ:** Азияға ла ҡарарға кәрәк. Бөгөн машина сығарыу буйынса Ер шарында Ҡытай беренсе урында. Бына һиңә көрсөк...

**Т.НИӘТШИН:** Ҡытайҙар үҙҙәренең закон сығарыусыларына "Һеҙ, зинһар өсөн, беҙгә насар закон сығармағыҙ", тип әйтәләр икән. Ни өсөн? Сөнки ҡытайҙар законды яҡшы булһа ла үтәй, насар булһа ла үтәй. Был өлкәлә башҡорт та шулай. Башҡорт ул законға буйһона һәм беҙ матди байлыҡтар һанланған донъяла йәшәйбеҙ икән, ҡырағай булһа ла, ул закондарҙы һанға һуҡмайынса йәшәй алмайбыҙ. Тик суфыйсылыҡҡа ҡайтып ҡына беҙ һаҡланып ҡала алырбыҙмы икән?

**С. ӘМИРОВ:** Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн беҙҙә дин менән бизнес яһайҙар, диндең таҙалығы булған идеологияһы менән шөғөлләнеүсе юҡ. Әгәр ҙә дин Мөхәммәт бәйғәмбәргә нисек бирелгән, шулай тотолған булһа, бөгөн беҙҙең дингә дәүләт яғынан да, халыҡ яғынан да икенсерәк булыр ине, моғайын.

**▸ Милләткә тәбиғәт тарафынан һалынған генетик потенциалды, көстө уятыу механизмы суфыйсылыҡта, тәриҡәттә ята. Беҙ бөгөн шул хаҡта ла беләбеҙ, Зәйнулла ишан Рәсүлев булмаһа, ул милләттәштәребеҙҙе мәсеттәрҙән сәхрәләргә алып сығып, зекер әйттермәһә, Әхмәтзәки Вәлиди шундай тиҙ арала ғәскәр төҙөй ҙә алмаған булыр ине. Ә ул заман өсөн нимә ул ғәскәр? Ғәскәр - ул автономиялы Башҡорт хөкүмәте һәм Рәсәй Федерализмы. Зекер әйтеп, Аллаһы Тәғәлә исеме менән үҙҙәрен нағышлаған Нәҡшбәндиә тәриҡәтендәге башҡорт суфыйҙары тора быларҙың башында.**

**Т. НИӘТШИН:** Кит әй. Ҡыҙыҡ. Әгәр ҙә ошо юл, ысынлап та, һыналған һәм дөрөҫ икән, беҙгә Америка асырға түгел бит.

**С. ӘМИРОВ:** Тәриҡәттән шикләнеп, ҡурҡып ҡараусылар бар хатта. Тәриҡәт - ул шул уҡ Ислам дине. Уның эсенә биш намаҙ ҙа, төрлө ғәйеттәр, Хажға сәфәр ҡылыу инә. Тәриҡәт - Аллаһҡа юл тигәнде генә аңлата.

**Шулай итеп…**

**Сәйфулла Әмиров менән Тимер Ниәтшин һүҙ алып барған әңгәмәне әлегә йомғаҡламай торорға булдыҡ. Әңгәмә дауам итә. Әлегә шуныһы мөһим: милләтебеҙ йәшәйешенә, уның киләсәгенә ыңғай йоғонто яһай алырлыҡ һәр төрлө тәғлимәтте йәшәргә яраҡлы тип иҫәпләйек. Ошо әңгәмәне дауам итергә теләүселәр беҙгә шылтыратырға онотмағыҙ, беҙ һеҙҙе ҙур ихласлыҡ менән менән редакциябыҙҙың сәй эсеү бүлмәһенә саҡырабыҙ.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

> ***Мин йыш ҡына 1917 йылғы менән 2007 йылғы башҡортто сағыштырам. 1917 йылғы башҡорт матди яҡтан хәлһеҙ булһа ла, рухи яҡтан шул хәтлем көслө булған. Беҙ бөгөн матди яҡтан 1917 йылғы башҡортҡа ҡарағанда хәллерәктер ҙә, әммә рухи яҡтан ҡайтышбыҙ. Сәбәбе бер генә: беҙҙе рухи көс биреп торған тарихыбыҙҙан айырҙылар. "Милләтем, йөрәгеңде ас, бына мин килдем", тигән кеше юҡ әлегә. Ундай лидер табылһа, тарихи хәтер, милли аң тиҙ уяна бит ул.***

---

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## ҮҪӘРГӘН БАТЫРҘАРЫ

### Иҫәнғол батыр

Борон батырҙар күп булған. Ер өсөн алыш яман булған. Әленән-әле яу баҫып ҡына торған. Шуға ир-егеттәр бәләкәйҙән үҙҙәрен ил һаҡлаусы итеп әҙерләй башлаған. Үҫәргәндәр ҡаҙаҡтар менән сиктәш йәшәгәс, барымта-ҡарымта ла йыш ҡына булып торған, ҡалмыҡтар ҙа килеп еткеләгән. Әммә үҫәргән батырҙары үҙ биләмәләренә ситяттарҙы индермәгән. Ҡайҙа көс, ҡайҙа һүҙ ҡеүәте, ҡайҙа алыш менән яуҙа еңеп сыға килгәндәр. Билдәле булыуынса, Ерәнсә сәсән ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер яуын һүҙ көсө менән кире бороуға өлгәшкән. Ә бына Иҫәнғол менән Сәйет балуан ярышта алдынғылыҡ бирмәй, оһоллоҡтары менән ҡаҙаҡ йөрәгенә ҡурҡыу һалған.

Иҫәнғол - данлыҡлы түлле Мәмбәттең улы. Бик белемле, рус телен дә һәйбәт белгән зирәк, отҡор, зиһенле был егет хәҙерге Иҫәнғол ауылында ғәскәр тотоп торған. Егеттәрҙе һалдат хеҙмәтенә яҙ алып өйрәтә лә көҙ ҡайтара икән. Шул Иҫәнғол, ҡаҙаҡ яғына сығып та егеттәрҙе әрме хеҙмәтенә өйрәтергә кәрәк, тип өгөткә йөрөгән. Тик ҡаҙаҡтар "Ой-бай, ҡыуығыҙ иштәкте, уландарҙы урыҫ яһамаҡ була", - тип, риза булмағандар. Һалдатҡа кеше бирмәһәгеҙ, Уралдан ҡыуылаһығыҙ, тип әйтеп ҡараған Иҫәнғол, тегеләр барыбер ҡаршы булған. Шунан Иҫәнғол үҙе менән ҡустыһы Ғәбит батырҙы, Сәйет көрәшсене, Ҡыуандыҡ исемле улын алып сыҡҡан. Улар ҡаҙаҡ байының аш биргән йыйынына тап килгәндәр. Йыйында ҡатнашырға саҡырылғас, Иҫәнғол Сәйет батырға "Һин көрәшеп ҡара" тигән. Ғәбит батырға "Ә һин алмашҡа сығырһың", тип әйткән. Сәйет батыр көрәшкән саҡта, Ғәбит түҙемһеҙләнеп, ғәйәрләнеп, ат өҫтөндә тибәләнеп ултыра, ти. Быны абайлап ҡалған Иҫәнғол "Төш аттан, боҙаһың бит", тип ҡысҡырған. Ғәбиткә көрәшергә насип булмаған, Сәйет балуан ҡаҙаҡ батырын алып та бырғыған. Көрәштән һуң бәйге ойошторолған. "Аттарҙы үҙле-үҙебеҙ менеп сабайыҡ та ҡуяйыҡ", - тигән Иҫәнғол. Былар дүртәүһе лә ал бирмәй сабып килгән, иң алда Сәйет балуан булған. Шунда йыйын ойошторған ҡаҙаҡтарҙың иң олоһо "Ой-бай, ары ҡараһаң да Сәйет балуан, бире ҡараһаң да Сәйет балуан. Артабан ярышып тормағыҙ, ҡуйығыҙ. Иҫәнғолдоң өгөтөн тыңлайыҡ", тигән.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**
**әҙерләне.**

✓ *Яңауыл ауылынан килгән Һибәтовтар ғаиләһенең тирмәһендә лә булдыҡ. Тирмә хужаһы, алдынғы механизатор, Ленин ордены кавалеры Ҡотдос Һибәтовтың тормош иптәше Рәсимә инәй ҙә сиҙәм күтәреү башланғандан алып тракторҙа эшләгән.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҺАБАНТУЙҘЫҢ БАҺАҺЫН...

## халыҡ йолалары күтәрә

**Йәй башында республиканың бар төбәктәрендә лә һабантуйҙар үткәреү йолаһы бар. Арҙаҡлы шәхестәргә, тәбиғәт ҡомартҡыларына һәм күркәм традицияларға бай төбәктә - Әбйәлилдә үткән был байрамда беҙ ҙә ҡатнаштыҡ һәм халҡыбыҙ йолаларының һәр кемгә ниндәйҙер юғары күтәренкелек, рух биреүенә шаһит булдыҡ.**

### Байрам байрамса үтте

Әбйәлилдең төп үҙенсәлектәренең береһе шунда: районда башҡортомдоң бер нисә ырыуы тупланып йәшәй. Түңгәүерҙәр, тамъяндар, ҡыпсаҡтар, күбәләктәр, бөрйәндәр холоҡ-фиғелдәре, көнкүреше, йәшәйеше, милли кейемдәре, ҡайһы бер йолалары менән айырылып торһа ла, бер ергә ерегеп, бер һыу эскәнлектән, күптән инде бер ырыу кешеләренә - әбйәлилдәргә әйләнгән. Ҡасандыр Урал заводтарына эшкә килгән һәм башҡорт янында ҡурсыу һәм анлау тапҡан урыҫ крәҫтиәндәренең ейәндәре лә бөгөн Әбйәлил ерен үҙенең тыуған ере тип белә. Шуға ла был милли байрам Әбйәлилдә тағы ла сағыуыраҡ, үҙенсәлерәк үтә.

Һәр кем һағынып көтөп алған һабантуйҙа, гәҙәттәгесә, милли көрәш, ат сабышы, ҡолғаға меңеү, тоҡ менән һуғышыу кеүек ярыштар ҙа, йыр-бейеүҙәр ҙә, уйынкөлкө лә булды. Һабантуйҙың борондан һабан байрамы булараҡ үткәрелеүен иҫәпкә алып, әбйәлилдәр һабан батырҙарын да тәбрикләне, сәсеү эшендә алдынғылыкты бирмәгән хужалыҡтарға аҡсалата бүләк тә тапшырҙы. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевтың һабантуйҙа ҡатнашыуы быйылғы байрамды тағы ла йәнлерәк, дәрәжәлерәк итте.

Шулай ҙа һабантуйҙың йәме дәрәжәле ҡунаҡтарҙың һанында түгел, ә шунда йыйылыусы ябай халыҡталыр, моғайын. "Һабантуйҙың рухын бында йыйылған ябай халыҡ күтәрә, - тигәйне ғүмерен балаларға белем биреүгә арнаған уҡытыусы Зөһрә апай Усманова ла. - Тирмәләр ҡорған ябай ауыл халҡы, ауылдың рухын, ырыҫын һаҡлаған инәйҙәр, еңгәйҙәр нимә генә бешермәй ҙә, нимә генә әҙерләмәй ошо байрамға! Улар ярҙамында юғалып барған йолалар янынан тергеҙелә. Халыҡ рухында, халыҡ менән генә йәшәй бындай байрамдар". Ысынлап та,Әбйәлилдә ҡатын-ҡыҙҙар советтары, мәҙәни усаҡтар, китапханалар селтәре хеҙмәткәрҙәре, фольклор түңәрәктәре йәш быуынды боронғо традициялар рухында тәрбиәләү йәһәтенән әүҙем эш алып бара. Һабантуйҙа эскән кеше бөтөнләй күренмәүе лә ошо тәрбиә һөҙөмтәһелер тип фараз иттек. Тимәк, ниндәй генә дәүерҙә йәшәмәйек, ҡатын-ҡыҙҙың рухи һәм физик көсө милләтте үҫтереүсе, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен, динен ҡурсалаусы булып ҡала бирә.

Шулай ҙа ысын һабантуй сәхнәлә бармай, тип, беҙ төрлө ауылдар ҡорған тирмәләр янына ашыҡтыҡ.

### Һеҙҙә тула баҫалармы, Беҙҙә тула баҫалар!

Әбйәлил ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо традицияларҙы, йолаларҙы тергеҙеү буйынса эшләгән эше һанап бөткөһөҙ. Тула баҫыу ҙа бик боронғо, онотолған шөғөлдәрҙең береһе иҫәпләнә. Шуға ла Амангилде ауылы хакимиәте биләмәһе ҡорған тирмә янында Рыҫҡужа ауылының "Ҡыҙылым" фольклор төркөмө һабантуйға йыйылған халыҡҡа тула баҫыу йолаһын күрһәтте. "Тула - ул йоҡаҡ ҡына итеп баҫылған кейеҙ, шуны бесеп, төрлө кейемһалым тегәләр, тип уйлаусылар бик яңылыша", ти Амангилде ауылынан тула



баҫыу йолаһын тергеҙеүсе Әбүбәкерова Ғәшүрә Зәйнулла ҡыҙы. Ғәшүрә апай һарыҡ йөнөнән тула баҫып, сәкмән, билбау, ойоҡ, башлыҡтан торған ирҙәрҙең боронғо эш кейемен теккән. Уны ҡышын урманға, утынға барғанда кейер булғандар, быймаһы булмағандар ойоҡ өҫтөнән сабата ғына кейһә лә, аяҡтар йылыла йөрөгән. Тула баҫыу ҙур физик көс, таһыллыҡ талап итә торған эш, Ғәшүрә апайға ла һабантуйҙа күрһәтеү өсөн килтергән ошо тула кейемдәрен баҫыу, тегеү өсөн ете ай самаһы ваҡыт кәрәк булған.

- Был эшкә боронғо ҡатын-ҡыҙҙар эшенең ауырлығын үҙ иңемдә тойоп ҡарау өсөн тотондом. Хәҙер бит анһат, һатып алабыҙ ҙа кейәбеҙ, тула баҫыу кеүек шөғөл онотолоп бөттө. Миңә 100 йәшлек әсәйем ҙур ярҙам күрһәтте, бар эште лә уның һүҙҙәре буйынса эшләнем. Былтыр ҡыш буйы ошо кейемде текһәм, быйыл өс дебет шәл һуҡтым. Тула баҫыу өсөн һигеҙ килограмм йөндө иләп, шуны махсус станокта - урын ағасында шәл һуҡҡан кеүек итеп һуҡтым. Йөндө һуҡҡандан һуң ул һүрелмәһен өсөн өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоп, кейеҙ баҫҡан кеүек баҫаһың. Был туланы баҫыу өсөн өс сәғәт самаһы ваҡыт кәрәк булды. Һуңынан драпҡа әйләнгән әҙер туланы бесеп, кейем тегәһең. Тула йөндән эшләнгәс, йылы ла, ел дә үтмәй, - тип тула баҫыу серҙәре менән дә уртаҡлашты оҫтабикә.

Йүнсел йүнен таба инде ул. Амангилде ауылының ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Роза Вәлиева ауылдың ҡатын-ҡыҙҙары ғына түгел, ә ир-аттары ла ҡул ҡаушырып ултырмауын, ә атай-олатайҙар йолаларын, шөғөлдәрен тергеҙеп, тырышып донъя көтөүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып китте. Ауылда кәзә үрсетеп, уны һауып ҡымыҙ яһай башлаусылар бар, йылҡысылыҡҡа ла иғтибар арта, йәҙләп йылҡы малы аҫраусыларҙы ла осратырға була.

### "Көрсөк юҡ беҙҙә", ти буранғолдар

Был төбәктең ҡатын-ҡыҙҙары кейеҙ баҫыу, ҡорама ҡорау менән генә дан тотмай, улар аш-һыу яраштырырға ла оҫта. Буранғол ауылы ҡатын-ҡыҙҙары, мәҫәлән, 92 төрлө милли аш-һыу төрө әҙерләп алып килгәйне һабантуйға. Һәр береһе матур милли кейемле, тормоштары менән ҡәнәғәт булыуҙары йөҙҙәренә сыҡҡан сәсән телле, бер-береһенә "апый", "еңгә" тип иркәләп, иркәләнеп кенә өндәшкән шаян инәйҙәргә ҡарап, бына кемдәрҙә ул донъя ҡото, донъя ырыҫы, тигән фекергә килеп, уларҙың ихласлығына иҙрәп кенә ултырҙыҡ. Ҡуйы самауыр сәйе менән һыйлаған арала үҙҙәре белгәнен беҙгә лә өйрәтеп өлгөрҙө улар. Ҡыҙыл эремсекте ит турағыс аша үткәреп, май менән бутап, йомарлап һалһаң, әжегәй әҙер. Талҡанға муйыл оно, шәкәр ҡатыштырып



ебәрһәң, тағы ла тәмлерәк була икән, тик уға ҡушылған май таҙа, бер ниндәй еҫһеҙ булырға тейеш. Ҡырҙа үҫкән ҡымыҙлыҡтан ҡайнатма ҡайнатырға була, тәмле лә, файҙалы ла, бәлеш өсөн эслек итеп ҡулланыу өсөн дә уңайлы. Ыҫланған ҡоротто ла инәйҙәр ерәнә еткереп яһай белә бында. Ҡоротто һарҡытып алғас, һалып таҫҡағандан һуң табаҡҡа йәбешеп ҡалған ҡорот өҫтөнә һөт ҡойоп, туҡып, яңы ҡаймаҡ һымаҡ ҡына яғылып торған ҡуйыртмаҡ яһап, балаларына, ейәндәренә ялаталар. Һарҡҡан ҡоротто һыҙырып алып ҡына киптерһәң - һыҙырма килеп сыға.

"Көрсөк юҡ беҙҙә, аяҡ-ҡулыбыҙ, һыйырыбыҙ һау, элек тә шулай йәшәнек, хәҙер ҙә бирешмәйбеҙ", тип оҙатып ҡалды беҙҙе Буранғол ағинәйҙәре.

### Һибәтовтар

Яңауыл ауылынан килгән Һибәтовтар ғаиләһенең тирмәһендә лә булдыҡ. Тирмә хужаһы, алдынғы механизатор, Ленин ордены кавалеры Ҡотдос Һибәтовтың тормош иптәше Рәсимә инәй ҙә сиҙәм күтәреү башланғандан алып тракторҙа эшләгән. Туғыҙ балаға ғүмер биргән улар, бөгөн ете балалары иҫән-һау, егерме ике ейәнейәнсәр, бер бүләләре бар. Өс ҡыҙҙары уҡытыусы, икеүһе тегенсе, улдары шофер, механизатор булып эшләй. "Балаларым береһе лә араҡы эсмәй, тәмәке тартмай, үҙебеҙ нимә яраштыра беләбеҙ, шуны ашап, буҙа, ҡымыҙ эсеп, байрамдар үткәрәбеҙ", - ти Рәсимә инәй улар менән ғорурланып. "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән" тигән мәҡәл Һибәтовтар тураһындалыр ул. Ҡотдос ағай һандыҡтар яһарға оҫта булғанға күрә, улдары ла уға эйәреп, ағас эшенә өйрәнгән, һабантуйға Азамат улы тирмә, сәңгелдәк эшләп алып килгәйне. Ә ҡыҙҙары әсәләре кеүек сигеү, бәйләү, кейеҙ, балаҫ һуғыу, милли кейемдәр тегеү кеүек ҡул эштәрен яҡшы белә, килендәр ҙә, ейәнсәрҙәр ҙә ҡалышмай. Шәжәрә байрамын ауылда беренселәрҙән булып үткәрә Һибәтовтар, төҙөгән шәжәрәләре менән баш ҡалаға ла барып ҡайтҡандар.



"Ҡул эше менән булышыу заман талабы булыуҙан бигерәк, күңел талабылыр ул", - тигән матур фекер әйтте Һибәтовтарҙың ҡыҙҙары Сәғиҙә апай. Күрәһең, күңелдәрендә йөрөткән матурлыҡты ҡул эштәренә оло ихласлыҡ менән, күҙ нурҙарын түгеп ҡайып һалып, был ғаилә тормоштарын хеҙмәтле итһә, хеҙмәт һөйөү уларҙың үҙҙәрен хөрмәтле итә. Һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ көн күрмәҫ - был хәҡиҡәткә күптән инанған Һибәтовтар, ә улар кеүек өлгөлө ғаиләләр Әбйәлилдә аҙ түгел.

**Шулай итеп...**

**Ихлас, алсаҡ кешеләр менән аралашып, зәңгәр күлдәре, шиғри һүҙле, тура телле сәсәндәре менән дан тотҡан Әбйәлилдән рух, сәм, милләт тотҡаһы булған инәйҙәрҙән аҡыл тиреп, күңелгә гәм һалып кире баш ҡалаға юлландыҡ. Ауылда йәшәүсе халыҡтың күңеле күтәренке булыуын, уның яйлап үҙенең асылына ҡайтыуын, насар ғәҙәттәрҙән арына барыуын, ҡабат тергеҙелгән боронғо йолаларҙың улар күңелендә рух уятыуын күреп шатландыҡ. Төп иғтибар үҙәге булған сәхнәнән сығыштарҙың тик урыҫ телендә яңғырауы ғына халыҡсан күркәм сараға яһалмалыҡ өҫтәне кеүек. Яһалмалыҡ тигәндәй, билдәле сәсәниә Вәсилә апай Садиҡова ла хәҙерге һабантуйҙарға ихласлыҡ аҙыраҡ була барыуы, күп нәмәнең исем өсөн генә, күҙ буяу өсөн башҡарылыуы тураһында әйтә бирел ҡуйғайны. Быныһы, әлбиттә, бындай сараларҙың рәсми өлөшөнә ҡағылалыр. Ә бына ябай ауыл халҡы араһында, тирмәләрҙә беҙ бары тик ихласлыҡ тойҙоҡ.**

Ләйсән НАФИҠОВА.







✓ *Бәләкәйҙән ныҡышмал, маҡсатҡа ынтылыусан, ихтыярлы булып үҫкән кеше тормошта ла юғалып ҡалмай, үҙ урынын таба. Уның холҡо ла күркәм, тормошо ла матур була.*



СПОРТ

# БАТЫР ИКӘНҺЕҢ, КӨРӘШ, ӘЙҘӘ -

## ысын ир-егеттәр спортта ла һынала

**"Район үҙәгенең 3-сө мәктәбендә "Көрәш - ир-ат һөнәре" тигән ҡанатлы һүҙҙәр яҙылған. Көрәштә майҙан еңеүсеһе булыуҙан бигерәк, көрәшә белеү һәр башҡорт егетенең бурысы булырға тейеш. Ысын ир-егеттәр шулай һынала", - тине Ғафури муниципаль районының балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбе директоры Азамат Мәхмүт улы. Беҙ үткән һанда милли көрәш темаһын бер аҙ ҡуҙғатыбыраҡ ҡуйғайныҡ инде. Был юлы ла 30 йыл хеҙмәт юлын спорт өлкәһенә арнаған, юғары категориялы тренер Азамат ИБӘТУЛЛИН менән ошо хаҡта әңгәмә ҡорҙоҡ.**



### Ярҙамдан ташламайбыҙ

Беҙҙең мәктәптә бөгөн көрәш, волейбол, шахмат, еңел атлетика, саңғы буйынса секциялар эшләп килә. Шахмат секцияһына балалар башланғыс кластарҙан уҡ йөрөй башлай. Спорттың был төрө көсләө үҫешкән беҙҙә. Уның буйынса юғары кимәлдә турнир үткәрә алабыҙ. Милли көрәшкә балаларҙы икенсе-өсөнсө кластан ҡабул итә башлайбыҙ. Беҙ уларҙы, әлбиттә, шундуҡ ҡулдарына таҫтамал тотторop, келәмгә сығармайбыҙ. Тәүҙә баланы физик яҡтан күнектерәбеҙ, көрәштең асылына төшөндөрәбеҙ, майҙанға сығырлыҡ ерлек әҙерләйбеҙ. Көрәште художестволы гимнастика менән сағыштырырға була. Ул үҙенә күрә бик ҡатмарлы техник спорт төрө. Беҙҙең көрәштең төп алымы - күкрәк аша ырғытыу. Тап шуға ла егеттәрҙе физик яҡтан сыныҡтырып, бәләктәренә көс туплағас ҡына, ошо алымға өйрәтә башлайбыҙ. Таһыллы ғына егеттәрҙең был һәләтен шөйләп, уны үҫтерергә тырышабыҙ, атаәсәһе менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ, уҡыуҙа яҡшы өлгәшеүен хәстәрләйбеҙ. Бала алтынсы-етенсе класҡа етһә, район гимназияһына уҡырға саҡырабыҙ. Ҡауарҙы, Юлыҡ, Сәйетбаба, Имәндәш, Ҡарағай ауылдары элек-электән көрәшселәр ауылы иҫәпләнә. Әле лә был ауылдарҙа көрәш секцияһы эшләй. Быйыл Йөҙимән ауылына көрәш буйынса тренер ебәрергә уйлайбыҙ. Беҙҙең балалар һоҡланып ҡарап торорлоҡ итеп көрәшә белә.

### Киләсәккә янаған проблемалар

Быға тиклем спорт мәктәбендә шөғөлләнеүсе балалар һаны йылдан-йыл арта килде. Тик бөгөнгө иҡтисади көрсөк шарттарында, тренерҙар штаты ҡыҫҡартылды, балалар һаны кәметелде. Әле спорт мәктәбендә бөтә райондан мең бала шөғөлләнә. Ғөмүмән, тренерҙар проблемаһы һәр ваҡыт киҫкен торған мәсьәлә. Ысынлап та, биш йыл уҡып, юғары белем алған, көсө ташып торған егет нисек итеп дүрт мең аҡсаға тренер булып эшләп йөрөһөн инде? Ул бүтән йүнәлештән китергә мәжбүр була. Тренерҙар араһында ла "Йыл уҡытыусыһы" кеүек конкурстар ойошторолһа, хеҙмәт стажына ҡарап эш хаҡына өҫтәмә түләнһә, бик һөйбәт булыр ине лә бит. Әле беҙҙә тренер булып ҡырҡтан уҙған ирҙәр эшләй, йәштәр бөтөнләй юҡ тиһәң дә була. Әгәр артабан да ошондай хәл күҙәтелһә, ун йылдан һуң нимә булыуы тураһында уйлауы ла ҡурҡыныс.

Буласаҡ спортсыға үҙен һынау һәм профессионаллеген үҫтереү өсөн туғыҙ йылда кәм тигәндә һигеҙ ярышта ҡатнашырға кәрәк, шуның дүртәүһе районда үтһә, ҡалғанында республикала үҙ көсөн һынап ҡарарға тейеш. Ә беҙгә ошо йылдар эсендә бер спорт төрөнә ике ярышта ҡатнашырлыҡ ҡына аҡса бүленә. Үҙебеҙҙең спорт мәктәбендә, гимназияла, 2-се мәктәптә матур спорт залдары төҙөлдө, 3-сө мәктәптә төҙөлөш эштәре бара. Ошо төҙөлөштәрҙән тыш, матди-техник база нығытылһа, балаларҙы ярыштарға алып сығыу өсөн дә аҡса бүленһә, яҡшы булыр ине. Сөнки әле бүленмәгән аҡса һөҙөмтәһе киләсәктә тағы ла күберәк сығымдар талап итәсәк.

Милли көрәште, әлбиттә, келәм һатып алып, тренер ҡуйып ҡына үҫтереп булмай. Әгәр ҙә ауылда балалар һаны кәмей икән, көрәшеүсе егеттәр ҙә булмаясаҡ, тренер ҙа кәрәкмәйәсәк. Милли көрәштең киләсәге - ауыл. Ауыл йәшәһә, милли көрәш тә йәшәйәсәк.

### Милли көрәште рекламаларға кәрәк

Ғәҙәттә, көрәш буйынса Рәсәй беренселеге үткәргәндә, күпселек Башҡортостан һәм Татарстан егеттәре призлы урындарға лайыҡ була. Был ярыштарҙа беҙҙең үҫмерҙәр татарстандыҡылар менән бер тигеҙ, хатта көслөрәк тә көрәшә. Әммә егеттәр өлкәнерәк йәшкә үҫеп еттеме, Татарстан көрәшселәре беҙҙекеләрҙе бер баҫҡыска уҙа ла китә. Ә ни өсөн шулай килеп сыға? Сөнки беҙҙең егеттәр уҡыу йортторына ингәс, һәләттәрен артабан үҫтерә алмай, юғалып ҡала. Бөгөн республикала бер генә юғары уҡыу йорто - Башҡорт дәүләт аграр университеты тейешле кимәлдә көрәш секцияһы алып бара. Унда тренер булып эшләгән Фәнис ағай Уразбахтин оҫта көрәшеүсе егеттәрҙе йыйып, улар менән күнекмәләр үткәрә. Күп егеттәр бында шөғөлләнгәс, тейешле шарттар ҙа етешмәй. Минең Өфө дәүләт нефть техник университетында уҡыған улым, мәҫәлән, Черниковканан был уҡыу йортона килеп шөғөлләнеп йөрөй. Уның бында килеп ҡайтыр өсөн генә лә юлға ике сәғәт ваҡыты китә. Ә инде икенсе сменала уҡый башлағас, нисек кенә теләһә лә, көрәшкә бөтөнләй йөрөй алманы. Бына нисек юғалтабыҙ беҙ буласаҡ майҙан батырҙарын! Милли төр булараҡ көрәш секцияһы булдырыуҙы һәр уҡыу йортона мәжбүри йөкмәтергә кәрәк. Элек беҙ уҡығанда йәй булдымы, спорт лагерҙарына ебәрә торғайнылар, хәҙер ундай нәмә бөтөнләй юҡ.

Татарстанда, мәҫәлән, үҫеп килгән һәләтле көрәшсе егеттәрен ныҡ күтәрәләр, уҡыу йортона индерәләр, ҙур күләмдә ярыштар уҙғарып торалар. Ҡаҙандың мең йыллығын үткәргәндә милли көрәш буйынса донъя чемпионаты үтте. Көнө буйы телевизорҙан был сараны күрһәттеләр. Хәбәрсе бер бәләкәй генә малайҙан: "Ни өсөн милли көрәшкә килдең?" - тип һорай. Ул: "Көрәшкем килә", - тип яуаплай. "Ә ни өсөн башҡа спорт төрөнә барманың?", - тип тағы ла һорағас: "Юҡ, юҡ, мин көрәшеп, машина алғым килә", - ти. Уларҙа бүләкләү системаһы яҡшы ойошторолған. Был да егеттәрҙе көрәшкә йәлеп итеүҙең бер сараһы булып тора. Бөгөн милли көрәште үҫтереүҙең тағы ла бер ысулы - ул киң мәғлүмәт саралары аша рекламалау. Бының өсөн аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла милли көрәш буйынса телетапшырыу эшләргә мөмкин. Унда районда-рҙа үткән турнирҙар, ил күләмендә еңгән батырҙарыбыҙ, көрәш серҙәре тураһында күрһәтергә була.

### Физик һәм рухи сәләмәтлек

Спорт, сәләмәтлектән ҡала, кешене тәртипкә өйрәтә. Бала бәләкәйҙән иртән иртүк тороп йүгерһә, мәктәптән ҡайтып, өйҙәге эштәрҙе башҡарып, төштән һуң күнекмәләргә китһә, уның бүтән нәмәгә ваҡыты ла ҡалмай. Бәләкәйҙән ныҡышмал, маҡсатҡа ынтылыусан, ихтыярлы булып үҫкән кеше тормошта ла юғалып ҡалмай, үҙ урынын таба. Уның холҡо ла күркәм, тормошо ла матур була. Ата-әсәләр бына ошоно аңларға тейеш. Ә бөгөн балаларҙың компьютер менән мауығыуы, телевизор ҡарауы (ә унда тик алама ғәҙәттәргә генә өйрәнергә була) төп бәлә башы булып тора. Унан һуң, спортсы тигәс тә, ул спорттан башҡа бер нәмә лә белмәй, тигән һүҙ түгел бит. Мәҫәлән, беҙҙең спортсы балалар араһында матур итеп йырлаған һәм башҡа һәләттәргә эйә булған егет-ҡыҙҙар байтаҡ.

Бер саҡ икенсе-өсөнсө класс малайҙарын яңғыҙым йылғанан ағырға алып киттем. Бик ҡатмарлы һәм ауыр һынау булды ул. Ни тиһәң дә, бәләкәйҙәр әле, бер нәмә лә эшләй белмәйҙәр. Нимәһе ғәжәп: был малайҙар шул ун көн эсендә үҙҙәре палатка ҡорорға, утын әҙерләп, ут яғырға, картуф әрсергә өйрәнеп ҡайтты. Был сәйәхәттән һуң уларҙың холоҡтары шул тиклем танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Улар мәктәпте тамамлағансы көрәш менән шөғөлләнде, хәҙер был егеттәрҙең икәүһе Мәскәүҙә, икәүһе Өфө дәүләт авиация-техник университетында, берәүһе Башҡорт дәүләт медицина университетында, берәүһе Өфө дәүләт нефть-техник университетында бюджет нигеҙендә уҡып йөрөй. Бер-икәүһе генә юғары уҡыу йортона инә алманы. Егеттәрҙең бәләкәйҙән спорт менән шөғөлләнеүе, характерҙарын сыныҡтырыуы, ихтыярын тәрбиәләүе ошондай уңыштарға өлгәшергә, тормошта үҙ юлын табырға, төрлө һынауҙарҙы йырып сығырға ярҙам иткәндер, тип уйлайым.

**Шулай итеп...**

**"Батыр булһаң, көрәш" йәки "Батырлығыңды майҙанда һынат" тип ҡайһылай тапҡыр әйткән халкым. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ үҙ көстәрен тап шулай майҙанда һынаған. Шуға ла улар физик яҡтан да, рухи яҡтан да көслө булған. Ә бөгөн ир-егеттәребеҙ батырлыкты саҡ ҡына дөрөҫ аңламай, көстәрен кәрәкмәгән нәмәгә сарыф итеп, бахыр хәленә лә төшөп ҡуя. Бында уларҙың үҙҙәрен генә ғәйепләп тә булмайҙыр. Ғөмүмән, беҙгә улдарыбыҙҙы ысын ир-азамат итеп тәрбиәләр өсөн уларҙы бәләкәйҙән спортҡа, үҙебеҙҙең милли көрәшкә ылыҡтырып үҫтерергә кәрәк. Шул саҡта ғына беҙ көслө рухлы, батыр йөрәкле, ҡыйыу ҡарашлы, юғары әхлаҡлы, аҡыллы шәхестәр үҫтерә алырбыҙ.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН

# КӨНДӨҘ ЙОҠЛАМА...

## сирләрһең

● Төштән һуң йоҡлап алырға ғәҙәтләнгән кешеләрҙең 2-се типтағы шәкәр диабеты менән ауырыу хәүефе арта, тип хәбәр итә Великобританияның Бирмингем университеты ғалимдары. Быға ике төрлө аңлатма бар: беренсеһе - көндөҙгө йоҡо төнгө йоҡоно ҡыҫҡарта, ә был шәкәр диабетына килтерә. Икенсеһе - йоҡонан уянған саҡта гормондар эше әүҙемләшә һәм инсулин тәьсирен кәмета.

● 1 майҙан Евросоюзға составында ит һәм һөт булған аҙыҡ-түлек алып сығыу тыйылды. Хәҙер таможня хеҙмәткәрҙәре сәйәхәтселәрҙән колбаса, консервалар һәм хатта шоколадлы кәнфиттәрҙе алып ҡаласаҡ. Был аҙыҡ-түлек төрҙәре ҡайһы бер сир сығанағы булыуын иҫәпкә алып эшләнә. Тыйыу балалар туҡланған аҙыҡҡа ҡағылмай.

● Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары, ҡәһүә йөрәк өсөн файҙалы, тигән һығымтаға килгән. Улар инсульт кисергән 1300 пациентты 10 йыл дауамында күҙәткән һәм көнөнә 5-7 шәшке ҡәһүә эсеүселәрҙең яртыһының хәле күпкә яҡшырған.

● Ғалимдар фекеренсә, кальций остеопороздан ғына һаҡламай, ябығырға ла ярҙам итә икән. Кальцитриол (D витамины) әүҙемләшкәндән һуң, организм энергия сығанағы итеп май күҙәнәктәрен ҡуллана.

● Ҡояштан һаҡлаусы яңы кремдар гиппопотам тиреһенән яһала башлаясаҡ. Былдай уй АҠШ-тың Калифорния штаты университеты ғалимдары башына килгән. Бегемот көнөнә 10 сәғәткә тиклем ҡояш аҫтында ятҡандан һуң да ҡояшҡа янмай икән. Баҡтиһәң, уны кеше тиренә оҡшаған ҡыҙғылт секрет матдә ультрафиолет нурҙарынан һаҡлай, бер үк ваҡытта бөжәктәрҙе лә ҡурҡыта. Ғалимдар гиппопотам тирен өлөшсәләргә бүлеп тикшергән һәм тиҙҙән уның нигеҙендә ҡояш нурҙарынан һаҡлаусы крем эшләргә йыйына.

● АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән яғынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыуыу беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

● Великобританияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң, холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид пикопен менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

● Йәшелсә һәм емеш-еләкте күп ашаған үҫмерҙәр араһында психик ауырыуҙар һирәгерәк осрай. Ә ит, тәм-том, аҡ икмәк ашаған, татлы газлы һыу эскән балалар араһында агрессия һәм депрессия билдәләре йышыраҡ күҙәтелә икән. 1985 йылдан алып дөрөҫ туҡланмау һөҙөмтәһендә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы балалар һәм үҫмерҙәр һаны өс тапҡырға артҡан. Бынан тыш, пассив йәшәү рәүеше алып барған балалар һаны ла йылдан-йыл арта бара. Дөрөҫ туҡланыу һәм йәшәү рәүеше алып барыу менән киләсәк быуындың физик ҡына түгел, ә психик һаулығы ла туранан-тура бәйле икәнен был тикшеренеүҙәр тағы ла бер ҡат раҫлай.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



**Аҙыҡ-түлек, мәҫәлән, колбаса, кондитер аҙыҡтары, һағыҙ, төрлө тәмләткестәр һатып алғанда иғтибар менән уларҙың тышлығындағы яҙыуына күҙ һалһағыҙ, Е өҫтәмәләрен осратырһығыҙ. Уларҙың булыуы аҙыҡты һатып алыу йәки алмауҙы хәл итеүҙә ҙур роль уйнамай, әлбиттә. Тик аллергия, артыҡ ауырлыҡ йәки ашҡаҙан сирҙәре борсой башлаһа, барыһына ла аҙыҡтағы "химия" ғәйепле, тип борсола башлайһығыҙ, шулаймы? Е-лар, йәғни тәм көсәйтеүселәр, һаулыҡҡа зыян килтерә аламы? Әйҙәгеҙ, бергәләп яуап эҙләп ҡарайыҡ.**

# ТӘМ КӨСӘЙТЕҮСЕ...

## тәмде генә көсәйтәме?

### Серле "Е"

Был тәү ҡарашҡа ҡурҡыныс күренгән һандар артында ҡайһы саҡта бөтөнләй зыянһыҙ матдәләр "йәшеренгән". Мәҫәлән, Е300 - аскорбин, Е330 - лимон кислотаһы. Йәғни, "Е" хәрефе үҙе генә аҙыҡтың файҙалы йә файҙаһыҙ икәнлеген бер нисек тә билдәләй алмай, ул бары был матдәнең халыҡ-ара нумерация системаһына индерелеүе тураһында һөйләй.

Тәмде көсәйтеүселәр һәм үҙгәртеүселәрҙе Е600-699 һандары билдәрә. Тап улар ярҙамында ит тәме сығып торған туҡмас, сырлы чипсы ашайһығыҙ, ҡарбузлы һағыҙ сәйнәйһегеҙ. "Бына бит, химия!" тиерһегеҙ һеҙ. Һәм яңылышасаҡһығыҙ.

**Тәүге һәм иң мөһим асыш: бөтә тәмде көсәйтеүселәр ҙә тәбиғи, йәғни, тәбиғәттә булған матдәләрҙән яһала.**

### Бишенсе матдә

Глутамин кислотаһы - иң төп тәм көсәйтеүсе һанала. Ул бөтә тәбиғи аҙыҡтарҙың аҡһымы составына инә, йәғни ул күпмелер күләмдә тауыҡ итендә лә, сельдерей тамырында ла бар. Әммә япон ашһыуында киң ҡулланылған комбу ылымыһында уның күләме тағы ла ҙурыраҡ. Тап ошо үҫемлектән 1908 йылда япон ғалимы Кикунаэ Икэда глутамин кислотаһы ала. Тәүҙә кислота психиатрияла ҡулғытыусы сара булараҡ ҡулланыла, сөнки ул нервы импульстарын тиҙерәк тапшырырға ярҙам итә. Һуңғараҡ глутамин кислотаһының тәм рецепторҙарына тәьсире асыҡлана. Ул рецепторға ысын аҙыҡтың молекулаһын "йәбештерә", һөҙөмтәлә тәм ауыҙҙа оҙағыраҡ һаҡлана, аҙыҡ күпкә тәмлерәк тойола. Японлар быны "умами" тәьсире тип атай. Көнсығышта төп тәм дүртәү түгел, ә бишәү, умами тап бишенсе матдә булып сыға ла инде.

Был асыҡлангас та Японияла глутамат кислотаһы (мононатрий тоҙо) етештерелә башлай. Аҙыҡ өҫтәмәһен "адзиномото" - "тәмдең йәне" тип атайҙар. Уны был илдә һәр кафела тоҙ, борос һәм соя соусы янына өҫтәлгә ҡуялар.

**Икенсе асыш: был өҫтәмәләр аҙыҡты тағы ла тәмлерәк итеү өсөн генә барлыҡҡа килә.**

### Өҫтәмәләр эраһы

Технологтар хәҙер тәмде яҡшыртыу ғына түгел, ә уны алыштырыу мөмкинлеген дә аңлай. Аҙыҡ ни тиклем оҙағыраҡ һаҡлана, ни тиклем эшкәртеүгә дусар ителә, шул тиклем унда нуклеотидтар - ҡуҙғытыусы рецепторҙар аҙыраҡ ҡала, тимәк, тәм һәм еҫ тойғоһо көсһеҙәйә. Аҙыҡҡа глутамат өҫтәү был етешһеҙлектәрҙе юҡҡа сығарырға мөмкинлек бирә. Етмәһә, аҙыҡ етештереү сәнәғәтендә был кислотаны ҡулланыуҙы дөрөҫ тип табалар - тәбиғи аҙыҡ һәм ит барыбер бөтә кешелеккә етмәйәсәк. Ләкин һәр беребеҙҙе бөтә кешелек түгел, ә үҙебеҙҙең һаулығыбыҙ нығыраҡ борсой, шулай бит? Ошоға бәйле, төрлө һүҙҙәр тарала. Үткән быуаттың 70-се йылдарында уҡ Америка нейрофизиологы Джон Олни натрий глутаматы ҡомаҡтарҙың мейеһенә зыян килтереүен асыҡлай. Япон ғалимы Хироши Огуро өҫтәмәнең ҡомаҡтарҙың күҙ селтәренә насар тәьсир итеүе тураһында белдерә. Тиҙҙән натрий глутаматы ҡушылған аҙыҡты күп ҡулланыусы кешеләрҙең 30 проценты баш ауыртыуына, йөрәк тибешенең йышайыуына, тын алыуы ҡыйынлашыуына зарланыуы билдәле була. Был матдәнең көнсығыш аш-һыуында йышыраҡ ҡулланылыуын иҫәпкә алып, был ауырыу билдәләрен "Ҡытай ресторанЫ синдромы" термины менән атайҙар.

Ҡурҡынысмы? Әлбиттә, ҡурҡыныс, тик был фараздарҙың береһе лә фәнни яҡтан иҫбатланмаған. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тәжрибә һөҙөмтәләре кешеләргә ҡарата икенсе һөҙөмтәләр бирә, "Ҡытай рестораны синдромы"н бер нисә йылдан һуң буш хәбәр, тип табалар. Глутамат Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы һәм Codex Alimentarius (ООН тарафынан ҡабул ителгән халыҡ-ара аҙыҡ стандарттары кодексы) реестрына зарарһыҙ матдә булараҡ индерелгән.

**Өсөнсө асыш: бөгөнгө көнгә бер ниндәй ҙә клиник тикшеренеү глутамат һәм башҡа аҙыҡ тәмен көсәйтеүсе матдәнең зарарын асыҡламаған.**

### Тәмле - файҙалы тигәнде аңлатмай

Шулай ҙа беҙ аҙыҡ тәме көсәйтелгән аҙыҡты ашарға тырышмайбыҙ. Күп осраҡта уларҙың файҙаһына ҡарағанда, зыяны күберәк. Өҫтәмәләрҙе ҡулланыуҙың ике төрлө юлы бар. Беренсеһе - ысынлап та тәмде яҡшыртыу өсөн. Икенсеһе - аҙыҡтың насар сифатын һәм түбән аҙыҡ ҡиммәтен йәшереү өсөн. Аҙыҡ-түлек етештереү сәнәғәтендә өс төрлө тәм көсәйтеүсе ҡулланыла: глутамат, динатрий-5'-инозинат (Е631) һәм динатрий-5'-гуанилат (Е627). Глутаматты, ғәҙәттә, балыҡ һәм ит аҙыҡтарына, ә инозинат һәм гуанилат тоҙло һәм татлы консерваларға - джемдарға, конфитюрҙарға өҫтәйҙәр. Һуңғы осорҙа Рәсәй баҙарында был өс компоненттың берләшмәһе барлыҡҡа килде, уны риботайд тип атайҙар. Һөҙөмтәлә, риботайд хәҙер балыҡҡа ла, иткә лә, бәшмәккә лә, ярымфабрикаттарға ла, чипсыға ла, соустарға ла ҡушыла. Тиҙ туҡлана торған ресторандарҙа бер рецепт та уларһыҙ әҙерләнмәй. Тиҙ әҙерләнә торған аштар тәмле булһа ла уларҙың ысын аш менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмауы тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ. Үҫемлек йәки хайуан майы, тоҙ, борос, тәм һәм еҫ биреүселәр, крахмал, мальтодекстринды ҡушалар ҙа, аш әҙер. Ҡайһы бер осраҡта кипкән һөт өҫтә, сохари, кипкән йәшелсә һәм ит (йышыраҡ соя ите) тә өҫтәлә. Бындай аҙыҡ, әлбиттә, һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә.

**Дүртенсе асыш: тәм көсәйтеүселәр түгел, ә улар өҫтәлгән түбән сифатлы аҙыҡ-түлек зыянлы.**

### Ауырлыҡ ниңә арта?

2008 йылда Төньяҡ Каролина университеты ғалимдары тикшереүҙәр һөҙөмтәләрен баҫып сығара: баҡтиһәң, глутамат өҫтәлгән аҙыҡ ашаған кешеләр артыҡ ауырлыҡ менән яфалана икән. 2006 йылда 2 миллион кешенең рационын тикшергәндән һуң, немец ғалимдары ошондай уҡ һығымтаға килә. Бындай аҙыҡ-түлектә, өйҙә әҙерләнгәненә ҡарағанда, бер нисә тапҡырға калорий күберәк. Әгәр ҙә әҙер туҡмастың йәки аштың ҡабында "тәбиғи ит һурпаһында" тигән яҙыуҙы күрһәгеҙ ҙә, ышанмағыҙ, уларҙы йышыраҡ үҫемлек майы һәм крахмал нигеҙендә әҙерләйҙәр, шуға ла уларҙың стандарт порцияһында 150-170 ккал була. Сағыштырыу өсөн: яңы ғына әҙерләнгән борсаҡ ашында 80 ккал, ә башҡа йәшелсә аштарында тағы ла аҙыраҡ. Тиҙ бешә торған картуф та крахмал, он, пальма майы һәм соданан тора. Уға тағы ла тәм һәм төҫ биреүсе матдәләр, ҙур күләмдәге тоҙ һәм борос, тәм көсәйтеүселәрҙе лә өҫтәгеҙ. Бындай аҙыҡ-фантомды ни тиклем йышыраҡ ашаһаң, шул тиклем глутаматһыҙ аҙыҡ тәмһеҙ тойола башлаясаҡ.

**Бишенсе асыш: тәм көсәйтеүсе матдә ҡушылған аҙыҡтан, ысынлап та, һимерергә мөмкин.**

**Шулай итеп...**
**Аҙыҡ етештереү сәнәғәтендә ҡулланырға рөхсәт ителгән тәм көсәйтеүселәрҙең зарары юҡ. Тик составында глутамат һәм башҡа тәм көсәйтеүселәр булыуы аҙыҡтың сифатында шикләнергә урын ҡалдыра. Билдәләнгән стандарттар буйынса, тәүлегенә 2 грамм глутамат ашау һаулыҡҡа зыян килтермәй. Ә шулай ҙа... өйҙә ашағыҙ, төрлө тәмләткестәр менән мауыҡмағыҙ.**

***Аҡса кешенең аңлы рәүештә уйланылған ихтыяжын хеҙмәтләндереүҙән тыш, бүтән бер ниндәй ҙә мәғәнәгә эйә түгел, матди ерлегенән айырылған рухи инаныуҙың нигеҙе юҡ.***

*УЯН, УЙЛА...*

# ЭСКЕГӘ ҺАБЫШҠАНБЫҘ...

## Рәсәйҙә 80,8 процент йәштәр алкоголь ҡуллана

**Рәсәй йәмәғәтселеге эскелек менән көрәш тураһында һүҙ башланы. Мәскәүҙәге Сретен монастырының урындағы идара башлығы, халыҡ араһында үҙенең "Империяның һәләкәте. Византия һабағы" кинофильмы менән киң танылыу алған архимандрит Тихон (Шевкунов) күптән түгел Мәскәү һәм Бөтә Рәсәй патриархы Кирилл һәм Изге синода тарафынан алкоголь афәтенән һаҡланыу буйынса Сиркәү йәмғиәте советы етәксеһе итеп һайланды. "Аргументы и факты" гәзитенә уның менән бирелгән әңгәмәнән өҙөк килтерәбеҙ.**

### Ойошма төҙөү кәрәкме?

Әлегә ваҡытта Рәсәй ҡот осҡос хәлдә! Илебеҙ тарихында был бәлә әлегә тиклем улай ҙур ҡолас алғаны юҡ ине әле. Бөгөн йәмғиәт өсөн ғәҙәти күренешкә әйләнгән эскелек ҙур бер афәттәрҙең береһенә әйләнде. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, илдә бер кешегә йылына 8 литрҙан ашыу таҙа алкоголь тура килһә, этностың юҡҡа сығыуы күҙәтелә башлаясаҡ. Әгәр ҙә күрше дәүләттәрҙе, мәҫәлән, Төркиә, Ҡытай, Азия илдәрен алып ҡараһаҡ, был күрһәткес саҡ 5 литрға етә, ә Рәсәйҙә йылына бер кеше 14-тән алып 18 литрға тиклем араҡы эсә! Тикшереүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, үрҙә һанап кителгән илдәрҙә халыҡ һанының тотороҡло үҫеше күҙәтелһә, беҙҙең илдә инде нисәнсе йыл халыҡ һаны кәмей бара. Балаларҙың эсеүе бигерәк тә ҡурҡыныс. Һуңғы ун йылда алкоголгә тартылыусыларҙың йәше күҙгә күренеп кәмей - 16 йәштән 13 йәшкә тиклем барып еткән. Бөтә Рәсәй һорау алыу күрһәткестәренә ҡарағанда, иҫерткес эсемлектәрҙе 80,8 процент үҫмерҙәр һәм йәштәр ҡуллана.

Шулай уҡ Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, 2009 йылда мәктәпте тамамлаусы 100 уҡыусының 40 проценты ғына пенсияға тиклем йәшәйәсәк. Быға тик иҫерткес эсемлектәр генә ғәйепле! Халыҡ эскегә һабыша! Иң беренсе сиратта - йәштәр! Өлкән быуын өсөн бөтөнләй ҡайғырырға кәрәкмәй, тип әйтеп булмай. Рәсәйҙә ирҙәрҙең уртаса ғүмер оҙайлығы - 59 йыл. Алыҫҡа ҡарарға ла кәрәкмәй: емерелеп бөткән, әммә халҡы эсмәгән Чечняға ҡарағанда, экологик яҡтан таҙа Псков өлкәһендә үлем осрағы өс тапҡырға күберәк.

Күптән түгел класташтар осрашыуында булдым. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң 34 йыл үтеүгә, ике параллель кластарҙан 28 кеше үлгән! Улар араһынан тик береһененең генә үлеме эскелек менән бәйле түгел. Ҡалғандары барыһы ла эскелек арҡаһында: йөрәк туҡтауынан, бауыр циррозынан, панкреатиттан, кемдәрелер иҫерек килеш руль артына ултырып, йә иҫереп үҙ-үҙҙәренә ҡул һалып үлгәндәр.

### Башлағас, тамамларға кәрәк

Был башланғыс Горбачевтың "ҡоро закон"ына әйләнеп китер, тип һис кенә лә ҡурҡырға кәрәкмәй. Бигерәк тә алкоголгә ҡаршы кампания ваҡытында уртаса ғүмер оҙайлығы беҙҙең ил өсөн күпкә юғары булған. Бына беҙҙең килешеүгә билдәле ғалимдар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡушылды. Йәмғиәт етәкселәрененең береһе - яҙыусы Валентин Григорьевич Распутин. Иҫерткес эсемлектәрҙең ҙур афәткә килтереүен һәр кешегә еткереүҙе, шулай уҡ эскелеккә ҡаршы закондар сығарыуҙы мөһим бурысыбыҙ итеп алдыҡ. Беҙ мәғлүмәт саралары, йәмәғәт ойошмалары, хөкүмәт етәкселәре менән хеҙмәттәшлек итәсәкбеҙ. Был аҙымдар ниндәйҙер өмөт уята. Әгәр ҙә бөтәбеҙ бергә һәм эҙмә-эҙлекле көрәшһәк, был афәтте еңә аласаҡбыҙ.

Яңы башлаған эшебеҙҙә ҡаршылыҡтар буласағы билдәле, әлбиттә. Спирт эшләп сығарыусы һәм һатыусыларҙың килеме күп кенә түгел, ә ғәйәт ҙур: совет ваҡытында спиртҡа дәүләт монополияһы булған ваҡытта, алкоголь ил бюджетына сит илгә нефть сығарып һатҡан кеүек үк килем килтергән. Шулай ҙа мин алкоголь мафияһын еңә алырыбыҙға ныҡлы ышанам. Закондар сығарып ҡына ҡалмайынса, рәсәйлеләргә эсеү, ысынлап та, һаулыҡ өсөн зарарлы һәм оят икәнен иҫбат итеп, йәштәргә араҡы һатыуҙы тыйыу һәм уларға хаҡтарҙы күтәреү йәмғиәт ҡарашын үҙгәртмәйенсә ҡалмаясаҡ. Ошоно һыҙыҡ өҫтөнә алып үткем килә - беҙҙең "Дөйөм эш" проектының принципиаль позицияһы тыйыу түгел, ә аңлатыу. Кешеләр, мәҫәлән, хатта самаһын белеп эсеүсенең дә (аҙнаһына иҫерткес эсемлекте ике-өс тапҡыр ҡулланыусы) үҙенең ғүмерен 20 йылға ҡыҫҡарта икәнен белергә тейеш. Иң мөһиме, был эште башлау, артабан беҙ уны аҙағына тиклем еткерергә тейеш!

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…*

**Ниһайәт, Мәскәү тарафтарында эскелеккә ҡаршы көрәш тураһында һүҙ сыҡты. Бының яҡшы һөҙөмтәләрен күрге килә. Православие дине әһелдәре башлаған эшкә Ислам дине әһелдәре, бөтөн мосолмандар ҙа йәлеп ителеүен күрге килә. Мәҫәлән, беҙҙең республикала ла эскелеккә ҡаршы көрәш буйынса эштәр шәптән түгел. Бигерәк тә халҡының әҙәпле, егәрле, уңған, берҙәм булыуы, ҡунаҡсыллығы менән дан алған ауылдарыбыҙ ҡот осҡос хәлдә. Ололар ҙа, йәштәр ҙә эсә бөгөн. Был ҡот осҡос афәттән ҡотолоу юлы ҡайҙа? Шул турала бер нисә кеше үҙ фекере менән уртаҡлашты.**

**Алмас ШАММАСОВ, БР Журналистар союзының яуаплы сәркәтибе:** Әлбиттә, алкоголизм бөгөн дауаланмаҫ ҡурҡыныс бер сир кеүек ҡабул ителә. Әммә минең ҡарашҡа, спиртлы эсемлектәргә булған "мөхәббәтенән" кешелек киләсәктә тулыһынса арынасаҡ. Быға минең иманым камил. Мин быны әлегә бер ниндәй ҙә факттар, логик конструкциялар менән иҫбатлай алмайым, әммә ышанысым бар. Шуға ла алкоголизм һәм ул сәбәпсе булған башҡа әшәке күренештәр алдағы көндәрҙә бөтәсәк, тип уйлайым. Әммә ышаныу, хыял - ул бер хәл, ысынында кеше шул көндәрҙе еткерер өсөн эшләргә һәм көрәшергә тейеш. Тик бер кеше генә түгел, ә бөтөн йәмғиәт бергәләп көрәшкәндә генә маҡсатҡа ирешеп булыр. Минеңсә, эскелекте төрлө пропаганда, агитация юлы менән, закондар сығарып һәм башҡа шундай саралар менән генә еңеп булмаясаҡ. Алкоголизмды еңер өсөн йәмғиәттең аңы үҙгәрергә тейеш, ә бының өсөн ошо йәмғиәтте формалаштырған, тыуҙырған, йәшәткән иҡтисади һәм ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе үҙгәртеү мөһим. Аныҡ миҫалға килгәндә, халыҡты эш менән тәьмин итергә, ҡолдар һәм хакимдар системаһын ватырға, кешеләр араһында кешелек мөнәсәбәттәре булдырырға кәрәк. Йәмғиәттең һәр ағзаһының хеҙмәте ижади булырға, ул үҙ эшенән йәм табып йәшәргә тейеш. Тап бына ошо алкоголизм наркоманлыҡ, енәйәтселек кеүек алама күренештәргә нигеҙ булып тора ла инде. Эскелекте еңгәндә генә бөтә әшәкелектәр бөтәсәк.

**Илгизә АҠБУЛАТОВА, уҡытыусы:** Мәскәүҙәге дин әһелдәренең эскелеккә ҡаршы көрәш башлауына ҡыуандым, әлбиттә. Бәлки, ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшеп булыр. Эскене тыя алһаҡ, төрлө енәйәттәрҙән ҡотолорбоҙ, юлда фажиғәләр булмаҫ, етем балалар әҙәйер. Юҡһа, ата-әсә эскән ғаиләләрҙе алып ҡараһаң, балалар тормош мәғәнәһен, өй йылыһын, ата-әсә наҙын күрмәй үҫә. Уларҙан киләсәктә кем сыға? Бөтә ерҙә лә һыра, тәмәкене рекламалағанға күрә, үҫмер балаларҙың уларҙы тәмләп ҡарағыһы килә, сөнки улар мода артынан ҡыуа. Хәҙер тыйһалар, антирекламалар эшләһәләр, улар, эсеү модала түгел, тип уйлаясаҡ.

Йәштәргә иң беренсе оло быуын өлгө күрһәтергә тейеш. Улар эсә, тарта, ә балаларҙың ҙур кеше булып күренгеһе килә һәм ололарҙы ҡабатлай.

**Шулай итеп...**

**Хәҙер ҡалала уҡып йөрөүсе йәштәрҙең күбеһе эскегә ҡаршы. Бер саҡ юғары уҡыу йортонда уҡыған ваҡытта беҙҙе бер уҡытыусыбыҙ: "Һеҙ, йәштәр, эсәһегеҙ..." - тип әрләй башланы. Шул ваҡытта бер егет: "Ул дөрөҫ һөйләмәй, үҙе эскәнгә күрә беҙҙе эсә тип уйлай. Хәҙер күп йәштәр эсмәгәнен ул хатта белмәй ҙә", - тигән фекер әйтте. Ысынлап та, ҡалаға килеп, юғары белем алыусы, алдынғы йәштәр эсмәүҙе хуп күрә. Күптәре айыҡлыҡҡа дин аша килә. Дингә баҫҡан егеттәргә, ҡыҙҙарға башҡалар эйәрә. Былар барыһы ла аңлы рәүештә башҡарыла, ә беҙҙең Ислам дине әһелдәре, муллаларыбыҙ өгөтләгәнгә түгел. Ә шулай ҙа беҙҙең дин әһелдәренең дә ошо эшкә тотоноуын, бигерәк тә ауыл йәштәрен эскелек һаҙлығынан тартып сығарыр өсөн ең һыҙғанып эшкә тотоноуын бик тә күрергә теләр инек...**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бөйөклөк миндә түгел, мин - бөйөклөктә

Көндәлек тормошта беҙҙең хис-тойғоларыбыҙҙы ҡуҙғытыусы сәбәптәр етерлек. Уратып алған донъялағы әйберҙәр менән даими бәйләнешкә инеү һөҙөмтәһендә беҙ уларға айырыуса әһәмиәт бирәбеҙ. Мәҫәлән, беҙ йылы һүҙгә ҡарағанда торт киҫәге күңелебеҙҙе нығыраҡ күтәрәсәгенә ышана башлайбыҙ; тормошобоҙҙо йәмләндереп ебәреү өсөн беҙ тәмлекәстәр ҡулланабыҙ. Асылда, бик күп матди ҡиммәттәр беҙҙе күңелһеҙ тойғоларҙан арындырыу маҡсатында уйлап сығарыла. Улар арҡаһында беҙ хаталарыбыҙҙы күрмәмешкә һалышабыҙ, сәләмәтлегебеҙгә битараф ҡарайбыҙ. Күңел төшөнкөлөгө кисергәндә рухыбыҙҙы нығытыр өсөн йәһәт кенә берәй яҡындағы магазинға йүгерәбеҙ, шулай аҡсаға һатып алып булмай торған рухи бәхеткә өмөт итәбеҙ.

Ә инде уңышҡа өлгәшһәк, был байлыҡтың хужаһы булыуҙан туҡтайбыҙ, һәм ул беҙҙең менән идара итә башлай. Ваҡыты-ваҡыты менән маятник бәүелеүенә ауырлыҡ көсө нисек тәьҫир итһә, көйләүсе көстәр ҙә беҙҙе тигеҙләштереүе мөмкин. Был көстәр иҡтисади көрсөк, хеҙмәт буйынса икенсе урынға күсерелеү йәки ауырып китеүгә бәйле булыуы ихтимал. Әммә был ҡаршылыҡтар рухи үҫеш өсөн яҡшы мөмкинлек була ала. Ул кеше бер үк ваҡытта матди яҡтан да, рухи яҡтан да бай була алмай, тигәнде аңлатмай. Бында беҙ эйә булған алтын йәки көмөш түгел, ә уларға табыныуыбыҙ хәүеф тыуҙыра. Беҙгә үҙебеҙгә: "Мин матди әйберҙәрҙең ҡоломо, әллә бары тик тормошҡа үҙ өлөшөмдө индереп, уларҙың эскерһеҙ бағыусыһы ғына булып тораммы?" -тигән һорау бирергә кәрәк.

Аҡса кешенең аңлы рәүештә уйланылған ихтыяжын хеҙмәтләндереүҙән тыш, бүтән бер ниндәй ҙә мәғәнәгә эйә түгел, матди ерлегенән айырылған рухи инаныуҙың нигеҙе юҡ. Ысын бәхет рухи донъянан матди донъяға ниндәйҙер ижади идея алып килеүҙән ғибәрәт. Был инде кешеләргә файҙа килтереп, уның урынына рәхмәт һүҙҙәре ишетеү шатлығы алып килә. Улай ғына ла түгел, рухи байлыҡ матди байлыҡ кеүек үк универсаль ҡағиҙәләргә таянып эш итә. Көндәлек тормоштағы физик объекттар уларҙың рухи асылының сағылышы ғына булып тора. Матди донъяла тормошҡа ашҡанға тиклем улар барыһы ла тормошта кәрәкле мөһим идея булараҡ, уйҙарҙа кәүҙәләнеш ала. Һәм, ниһайәт, аҡса - ул кеше инициативаһын дөрөҫ ойоштороу һәм гармониялы итеп ҡулланыу өсөн уңайлы сара. Был юғары маҡсат матди бүләкләүгә мохтаж. Ысынында иһә, беҙҙең талаптарға яуап биреү-бирмәүенә ҡарап, күпселек хафа сигеүҙәрҙән ҡотолорға мөмкин, бының өсөн "Бөйөклөк миндә түгел, мин - бөйөклөктә" тигән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү ҙә етә. Беҙ киң күңеллелек һәм һөҙөмтәле эштәрҙең сығанағы булып тормайбыҙ, беҙ бары тик был ниғмәттәрҙе кешелеккә һирпеүсе һауыт ҡына. Беҙ ер байлыҡтарының хужаһы түгел, ә бары тик уларҙың бағыусыһы ғына булып торабыҙ. Беҙ ошо йөрәк ғилеменән сығып эш итә башлаһаҡ, был хәҡиҡәтте ҡаплап тороусы битлектәр юғаласаҡ. Һүҙ һәм эш ихлас күңелдән башҡарылғанда, кешеләр рухи төшөнсәләрҙән һабаҡ алыуға ынтыла башлай.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# МАТУР ҮТҺЕН, ТИҺӘҢ ЯЛ...

## законға күҙ һалып ал!

**Йәй - ҡыҙыу эш осоро ғына түгел, рәхәтләнеп ял итеү мәле лә ул. Күрсәк михнәттәренә ҡарамайынса, күптәр отпускыға йыйына, пландар ҡора. Ошо матур хыялдарҙы көтөлмәгән күңелһеҙлектәр килеп сығып боҙмаһын өсөн ҡайһы бер хоҡуҡ мәсьәләләрен асыҡлап, алдан белеп ҡуйыу бер ҙә ҡамасауламаҫ, моғайын.**



### Ял нисек иҫәпләнә

**Ял көндәре отпуск иҫәбенә инәме? Ул ниндәй тәртиптә: календарь буйынсамы, әллә эш көндәре иҫәбенән хисаплап сығарыламы?**

Отпускыларҙың бөтә төрҙәре лә фәҡәт календарь көндәрҙә иҫәпләнә, шулай булғас, йәкшәмбе көндәре лә отпуск иҫәбенә инә. Ә бына эш көнө булмаған байрам көндәре отпускыға иҫәпләнмәй.

РФ Хеҙмәт кодексының 120-се статьяһында ҡаралғанса, 1, 2, 3, 4, 5 һәм 7 ғинуар, 23 февраль, 8 март, 1 һәм 9 май, 12 июнь, 4 ноябрь байрам көндәре булып тора.

### Китергә мәжбүр итһәләр...

**Әле алырға теләгем булмаһа ла мине отпускыға китергә мәжбүр итәләр. Был осорға мин икенсерәк пландар ҡорғайным. Миңә ни эшләргә?**

Эшләгән ойошмағыҙҙа, закон талап иткәнсә, йыл башынан уҡ отпускылар графигы төҙөлмәгән булһа, эш биреүсе хеҙмәткәрҙе отпускыға ебәреү хаҡында ике аҙна алдан хәбәр итергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта һеҙҙең фекер иҫәпкә алынырға тейеш.

РФ Хеҙмәт кодексының 123 статьяһына нигеҙләнеп, пландарығыҙға тап килмәгән ваҡытҡа отпуск алыуҙан яҙма рәүештә баш тарта алаһығыҙ. Шулай ҙа барыбер был мәсьәләне эш биреүсе менән килешеп хәл итеүегеҙ хәйерлерәк булыр.

### Ялдан саҡыртып алһалар...

**Бухгалтер булып эшләйем. Үҙенә кәрәк саҡта етәксемә мине отпускынан саҡыртып сығарыу бер ни тормай. Был инде йүнләп ял итеү түгел, миңә ни эшләргә?**

Бер генә нәмә кәңәш итә алабыҙ: отпускыға ҡайҙалыр ситкә китеп ял итә алаһығыҙ. Мәҫәлән, ул, моғайын, һеҙҙе Ҡырым һынлы Ҡырымдан саҡыртып алмаясаҡ бит инде. Ә, гөмүмән, хеҙмәткәрҙе отпускынан уның ризалығы менән генә саҡыртып сығарырға мөмкин.

Шул уҡ ваҡытта башҡа ҡайһы берәүҙәрҙең дә ҡолағына төшөрәбеҙ: зарарлы йәки хәүефле эш шарттары менән бәйле 18 йәшкә тиклемге эшселәрҙе, ауырлы ҡатындарҙы отпускынан эшкә саҡыртып сығарыу тыйыла.

Ә инде саҡыртып сығарылған хеҙмәткәрҙең файҙаланылмаған ял көндәре уның ҡарамағы буйынса үҙенә уңайлы башҡа ваҡытта бирелергә тейеш.

### Бүлеп алырға буламы?

**Отпуск көндәрен бер юлы алғым килмәгәйне, ләкин етәксе риза түгел...**

Отпуск көндәрен өлөшләтә бүлеп тә алырға була, әлбиттә, ләкин был ике яҡтың да ризалығы менән башҡарыла. Шул уҡ ваҡытта икегә бүленгән отпуск көндәренең бер өлөшө 14 көндән дә аҙыраҡ булырға тейеш түгел.

### График боҙолһа...

**Шәфҡәт туташы булып эшләйем. Дүрт көн аша бер тәүлек буйына тир түгергә тура килә. Әле мине тәүлек буйы дежурҙа торғандан һуң ял иткәнде лә көтмәйенсә шунда уҡ отпускыға ебәрҙеләр. Был дөрөҫмө?**

Сменалы эш бында иҫәпкә алынмай. Әлеге лә баяғы отпускылар графигы буйынса эш ителә. Әгәр һеҙҙе ялға графикҡа ярашлы ебәргәндәр икән, бында хоҡуҡ боҙоу юҡ. Ә инде ялға графикты һанға һуҡмайынса ебәрһәләр - был дөрөҫ түгел. График буйынса эш итеү етәксе өсөн дә, хеҙмәткәр өсөн дә мотлаҡ. Уны һанға һуҡмау РФ Хеҙмәт кодексының 123-сө статьяһын боҙоу тигән һүҙ.

### Эш хаҡы артһа...

**Мин отпускыла саҡта беҙгә эш хаҡы арттан. Шуға бәйле, ял итеп бөтөп, эшкә сыҡҡас, мин отпуск аҡсаһын ҡайтанан иҫәпләүҙәрен һораным, ләкин минең үтенес ҡәнәғәтләндерелмәне. Был дөрөҫмө?**

Дөрөҫ, сөнки отпуск аҡсаһы һеҙ 12 ай буйына эшләгән аҡсалар суммаһынан сығып иҫәпләнә. Ә яңы эш хаҡы һеҙгә ялдан сыҡҡас, арттырылған күләмдә түләнә башлаясаҡ.

Ә бына өҫтәмә эш төрө менән шөғөлләнгән хеҙмәткәрҙәргә түләнгән эш хаҡы отпуск аҡсаһын сығарғанда иҫәпкә алына.

### Көндәрең тороп ҡалһа...

**Былтырғы отпускымда 25 көн (28 урынына) ял итеп, эшкә сығырға тура килде. Файҙаланылмай тороп ҡалған 3 көндө аҡсалата түләүҙәрен һораһам да, түләмәнеләр; киләһе йыл 31 көн ял итерһең, тинеләр. Был дөрөҫмө?**

Дөрөҫ. 28 календарь көндән артыҡ булған хәлдә йыл һайын түләнә торған отпускының бер өлөшө генә аҡсалата компенсация менән алмаштырылыуы ихтимал. Ә һеҙҙең йыллыҡ отпускығыҙ 28 көндән тора, шуға күрә файҙаланылмай ҡалған көндәр өсөн түләнмәйәсәк. Ул көндәрҙе аҙағыраҡ файҙалана алаһығыҙ.

РФ Хеҙмәт кодексының 127-се статьяһына ярашлы, файҙаланылмай ҡалған отпуск көндәре йә иһә тотош отпускылар эштән бушатылған осраҡта ғына түләнеүе ихтимал.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы саҡыра

**17 июндә** йәш, талантлы скрипкасы **Илшат Мөслимов** һәм БР халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры сығыш яһай. Концертта башҡорт халыҡ көйҙәре, классик һәм композитор әҫәрҙәре яңғыраясаҡ. Кисәлә шулай уҡ Флүрә Килдейәрова, Азат Айытколов, Әлим Ҡәйүмов, Илсур Хәбиров һәм "Далан" фольклор-эстрада төркөмө ҡатнаша.

**24 июндә** джаз оҫтаһы **Олег Кирәйев** һәм филармонияның эстрада-джаз оркестры сығыш яһай.

**25 июндә** Башҡортостандың халыҡ артисы **Владислав Мортазин** орган кисәһенә саҡыра. Концертта Гөлназ Сәйәхова (арфа), Аяз Нухов (виолончель), Артур Ситников (контр-тенор) ҡатнаша. Программала: Бах, Вивальди, Франк, Гражани, Форе әҫәрҙәре.

ИҒТИБАР!

## УҠЫРҒА САҠЫРАЛАР

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 2009-2010 уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итеү маҡсаты менән 22 июндә - Күгәрсен, Мәсетле райондарында һәм 24 июндә Өфө ҡалаһында 8, 9, 10-сы кластарға ҡабул итеү имтихандары уҙғара.**

Һынауҙар башҡорт теленән (инша), рус теленән (диктант йәки тест), математиканан (контроль эш) үткәрелә. Имтихандар Күгәрсен районы Мораҡ гимназияһында, Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ башҡорт гимназияһында 2009 йылдың 22 июнендә иртәнге сәғәт 9-ҙа башлана, 24 июндә иртәнге сәғәт 9-ҙа Өфө ҡалаһында (Рәсәй урамы, 88-се йорт) уҙғарыла.

8-се класҡа тик егеттәр генә ҡабул ителә.

**Үҙегеҙ менән түбәндәге документтарҙы алып килергә:**

1-се кластан башлап бөтә уҡыу йылдарының өлгәшеү табеле күсермәһе, тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхәһе һәм күсермәһе), амбулатор карта (112 форма).

Имтиханда ҡатнашыусы үҙе менән шаҡмаҡлы дәфтәр, ручка алып килә. Һайлап алыу барышында республика, Рәсәй кимәлендәге предмет олимпиадаларында, бәйгеләрҙә еңеүселәр, призерҙар, лауреаттар гимназияға ҡабул ителгәндә өҫтөнлөк менән файҙалана.

**Телефондар:**
**284-66-09, 244-70-38, 284-24-07.**
**Адрес: Өфө, Рәсәй урамы, 88**
**Электрон адрес: brgil @mail.ru**

***

**Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы:**

**а)** тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары; башланғыс класс уҡытыусылары; музыка уҡытыусыһы; инглиз теле уҡытыусыһы; тарих уҡытыусыһы; химия уҡытыусыһы; биология уҡытыусыһы; йәшәү эшмәкәрлеге хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре уҡытыусыһы; социаль педагог; өлкән вожатый кеүек **вакантлы урындарға конкурс иғлан итә.**

**б) уҡыусылар ҡабул итә. Уҡытыу профилдәре:**

- 1-се кластан инглиз теле, информатика;
- 5-9-сы кластан профилгә әҙерлек предметтары;
-10-11-се кластан уҡытыу өс профилдә ойошторолаҫаҡ: физика-математика профиле, филология профиле, социаль-иҡтисади профиль.

Гимназия һәм баш ҡалабыҙҙың иң алдынғы уҡыу йорттары араһында килешеү төҙөлгән (ӨДНТУ, БДПУ, БДУ, Рәсәй финанс академияһының Өфө филиалы, Өфө юридик институты, радио-электроника колледжы, финанс-иҡтисад колледжы).

**Адрес: З. Исмәғилов ур., 1-се йорт, тел.: 256-33-00.**

***

**27 июндә** Башҡорт дәүләт университетының биология факультетын 1974 йылда тамамлаусыларҙың осрашыуы уҙғарыла. Йыйылыу урыны: сәғәт 12-лә университет бинаһының төп корпусы алды. Бәйләнеш өсөн телефон - **8 917 440 29 88**, Аҡъюлова Зифаға мөрәжәғәт итергә.

✔ *Өс кешене бергә йыйығыҙ һәм улар араһында һеҙ бер тиранды, уның бер фекерҙәшен һәм... бер ҡорбанды күрерһегеҙ.*

*(П. Буаст).*



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# БӨРЙӘН МӘҘӘКТӘРЕ

## Өрҙөргәс

Элегерәк бер ағай улына кәләш әйттерергә барған. Никах уҡығанда ҡыҙҙың ата-әсәһе мәһәр һорағас, 1000 һум тип әйткәндә, өҫтәлгә 500 һумын сығарып һалған һәм " Ҡалғанын - өрҙөргәс", тигән (йәнәһе, йөрәшкәндән һуң).

Шунан һуң уның үҙенә "өрҙөргәс" тигән ҡушамат йәбеште лә ҡуйҙы. Ул ағай үҙе күптән баҡыйлыҡҡа күскән инде (йәне йәннәттә булһын), ә балалары һаман да "өрҙөргәс" тип йөрөтәләр.

## "Сорви голова"

Реваль тигән ир уҙаманы леспромхоз директорынан баш төҙәтергә 3 һум аҡса һораған. Тегеһе бирмәгән. Директор Ағиҙел йылғаһының яр башында ғына йәшәй ине. Реваль, асыуынан нишләргә белмәй, директорҙың 20-ләп өйрәк себешенең баштарын өҙөп ырғытҡан. Илья Степанович (директор) иртәгәһен контораға: "Вот Реваль сорвал головы моих утят", - тип йәне көйөп һөйләй икән. Шунан һуң Ревалгә "сорви голова" тигән ҡушамат йәбеште һәм ҡустыларын да "сорви голова" ти ҙә ҡуялар (Икеһе лә әхирәткә күскән инде, йәндәре йәннәттә булһын).

## "Салып килтер"

Бер хужа үҙенең ат ҡарауһын күрше ауылға йомошҡа ебәргән дә "Фәлән фәләндәге минең сусҡаны ла салып килтер", тигән. Тегеһе хужаһының ҡушҡанын үтәп, сусҡаны тотоп, сарылдатып муйынынан салған да, тунамайынса-нитмәйенсә, хужаһына килтерһә, уныһы "Нинә суйҙың?" тип асыулана икән. "Бәй, мин уны һуйманым, үҙең әйткәнсә салдым ғына", тип аҡланған ат ҡараусыһы. Аңлағанһығыҙҙыр инде, был ваҡиғалағы хужа - татар, ат ҡарыусыһы башҡорт булған.

## Һыйырҙар ҡысыр ҡалған

Колхоз идараһы рәйесе үҙенең отчет докладында: "Барыһы ла һәйбәт тип әйтер инем, тик бына фермала мөдир йөрөй, бригадир Ғилметдин бар, ветфельдшер Вафир йөрөй, мин йөрөйөм, әммә һыйырҙар ҡысыр ҡалып бөткән, киләсәктә барыбыҙға ла уяу булырға кәрәк", - тип һүҙен тамамлай, йыйылыштағылар эстәре ҡатҡансы көлә.

**Сәләх ӘХМӘТОВ.**
**Бөрйән районы.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЛАМ НУРЫ ӨЙӨБӨҘҘӘ



*Исемдәребеҙ бик матур,*
*Нуриҙә һәм Нурислам.*
*Ғаиләбеҙгә йәм өҫтәне*
*Батыр егет Динислам.*

*Атайыбыҙ Юрис булғас,*
*Нурис була Нурислам.*
*Ислам нуры өйөбөҙҙә*
*Ҡустыбыҙ ҙа Динислам.*

*Әсәйебеҙ ярҙамсыһы*
*Туғаныбыҙ Нуриҙә*
*Бейергә лә өлгөрә ул,*
*Бар донъяға нур һибә.*

*Беҙҙең матур исемдәрҙә*
*Хәрефтәр ҙә көләшә*
*Сөнки улар кешеләргә*
*Бәхет, шатлыҡ өләшә.*

**Элмира ЮЛДАШЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

## Балан ҡатығы

Минең әсәйем балан ҡатығын былай эшләй: сей баланды суйын ҡаҙанда быҡтырып алғас, уны һыуынан һарҡытып ала ла, картуф төйгөс менән иҙә. Унан һуң иҙмәне иләк аша үткәрә. Иләк аша үтеүе еңел булһын һәм иҙмә артыҡ ҡуйырып китмәһен өсөн айырып алған балан һыуын иләк аша сайҙырып ебәрә. Әҙер массаға төмәнә ҡарап шәкәр ҡомо, күрәгә һалып бутағас, һалҡын урынға ҡуйыла. Ҡатнашма бер аҙ ултырып, тәм ингәс, сәй табынына килеп ҡунаҡлай. Бөтәһе лә яратып ашай әсәйемдең был аҙығын. Балан ҡатығы сәләмәтлек өсөн дә файҙалы, аппетитты ла күтәрә.

## Һөҙмә

Ҡуйы һөттө йылы урынға ҡуйып, сейләй ойотҡас (йәғни ойомос һалмайынса, үҙе ултырып ойоғас), марля тоҡ аша һөҙөп алаһың. Һөҙмә әҙер булғас, уға бер аҙ шәкәр ҡомо, ванилин һалып бутайһың. Минең әсәйем уға йөҙөм дә ҡушып ебәрә, бик тәмле килеп сыға.



## Ҡыҙыл эремсек

Бер күнәк айыртылған һөттө утҡа ҡуяһың да, ҡайнап сығыр алдынан 1 литр әсе ҡатыҡ һалып ебәрәһең. Май бешкәндән һуң ҡалған ҡаймаҡ һыуын да өҫтәп ебәрһәң, эремсек йомшаҡ, тәтле килеп сыға. Ошо массаны һыуы бөтөп, ҡыҙыл төҫ ингәнсе ҡайнатаһың. Унан һыуын һарҡытып алып, йәйеп һалып бер аҙ киптергәс, ит үткәргес аша үткәреп, һыйыр майы, төмәнә ҡарап шәкәр ҡомо ҡушып йомғаҡлайбыҙ.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХЫЯЛ МЕНӘН УЙНАМА,

## уның ҡыйралыуы хәүефле

Теләктәребеҙ шул тиклем самаһыҙ, улар хатта булған бәхет менән файҙаланырға ла ҡамасаулай.

**(Плутарх).**

Ҡайһы саҡта беҙ ҡурҡҡан нәмәләр беҙ теләгән һәм ынтылған нәмәләрҙән хәүефһеҙерәк булыуы мөмкин.

**(Д. Коллинз).**

Хыял менән уйнау хәүефле: уның ҡыйралыуы бәхетһеҙлеккә әүерелеүе мөмкин; хыял артынан ҡыуып, ғүмерендә ҡорбан итеүең дә бар.

**(А. Герцен).**

Кеше ысындан да маймылға оҡшаған шул: юғарыға үрмәләгән һайын арт һынын ғына күрһәтә.

**(Ф. Бэкон).**

Өс кешене бергә йыйығыҙ һәм улар араһында һеҙ бер тиранды, уның бер фекерҙәшен һәм... бер ҡорбанды күрерһегеҙ.

**(П. Буаст).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йәшәгән, ти, ике аҡыл эйәһе. Берәүһе йыш ҡына яңылыша торған булған, ләкин башҡалар уның ысынлап та бөйөк кеше икәненә ысын күңелдән ышанған. Икенсеһе ысынлап та юғары белем эйәһе булған, әлбиттә, уға ышаныусылар ҙа аҙ булмаған.**

**Бер ваҡыт ике аҡыл эйәһе лә үҙ уҡыусылары менән бергә тәбиғәт ҡаҙаһына осрай һәм кеше йәндәрен тамуҡҡа һәм охмахҡа ебәреүсе, хөкөм итеүсе ике фәрештә алдына барып баҫа. Фәрештәләр һәр берененән һорау ала һәм шулай тип ҡарар итә: беренсе аҡыл эйәһе һәм уға ышаныусы уҡыусылары - тамуҡҡа, икенсе аҡыл эйәһе һәм уның уҡыусылары ожмахҡа китә. Барыһы ла аптырашҡа ҡалған. "Ни өсөн улай?" тигән һорауға фәрештәләр шулай тип яуап биргән: "Ике аҡыл эйәһе һәм уларҙың уҡыусылары ла нимәгәлер ышана. Ләкин беренсе аҡыл эйәһе ниндәйҙер юғары көскә ышанам, тип уйлай, ләкин бары тик үҙенә генә ышана, ә уның артынан барыусылар Хәҡиҡәткә түгел, тимәк, уҡытыусыларына табына. Икенсе аҡыл эйәһе тик Хәҡиҡәткә ышана. Уның уҡыусылары ла Хәҡиҡәт эҙләүселәр, кешегә табыныусылар түгел. Үлемдән һуң йәшәү - ул Хәҡиҡәтте табыу. Уның ҡанундары кешеләр тарафынан уйлап сығарылһа, тарих бөтөнләй икенсе булыр ине. Шуға күрә беҙҙең ҡарарҙы башҡасаға үҙгәртеп булмай".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6069
Заказ 2374